***Немруд исемле залим ҡулынан утҡа ырғытылған Ибраһим бәйғәмбәр, утты һыу тамсылары менән һүндерергә тырышҡан ҡырмыҫҡаны күреп, уның ни өсөн быны эшләүен һораған һәм: "Утты бит барыбер тамсылар менән генә һүндерә алмаясаҡһың", - тигән. "Һүндерә алмаҫымды беләм, хөрмәтле Бәйғәмбәр, ләкин залимдарҙың һиңә ҡаршы ҡылған эштәренә ҡарата үҙ ҡарашымды белдерәм", - тип яуаплаған ҡырмыҫҡа...***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

15 - 21 СЕНТЯБРЬ (ҺАРЫСАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№37 (507)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡаймағы ҡайҙан сыға?**



4

**Башҡорт яҙмаһы...**

ете мең йыллыҡ тарихҡа эйә



7

**Азияға ла иғтибар йүнәлтәйек,**



8-9 йәғни Йәштәрҙең ҡытай, корея, япон телен өйрәнгәне

**"Туғанлыҡ"тың төп бүләген...**

Стәрлетамаҡ театры алды



11

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Туғанлыҡ" Халыҡ-ара төрки телле театрҙар фестивалендә ҡатнашҡан ҡунаҡтар Өфө, Башҡортостан тураһында ниндәй фекерҙә?




***Фират ДЕМИРАГ, Төркиә республикаһы Анкара дәүләт театрының художество етәксеһе:*** Башҡортостанға беренсе тапҡыр килеүем. Ләкин беҙҙең менән килгән бер артисыбыҙ ун алты йыл элек Өфөгә фестивалгә килгән булған. Уның һөйләүе буйынса, ошо йылдар эсендә Өфө ныҡ үҙгәргән, матурайған, байыған. Ҡала яҡты булып ҡалған. Минә лә Өфө тәү күреү менән үк күңелемә хуш килде. Төркиәне ҡалдырып, икенсе дәүләт сиктәренә сыҡтым, әммә Башҡортостандың баш ҡалаһына аяҡ баҫыу менән үк уның минең өсөн ят түгеллеген аңланым. Үҙ ҡәрҙәштәремде, туғандарымды осраҡҡандай булдым бында. Беҙҙе күп нәмәләр берләштерә - мәҙәниәт, фекерләү ҡеүәһе, мөнәсәбәттәр. Телдәребеҙ бер аҙ алыҫлашһа ла, ул беҙҙең рухи яҡынлыҡты барыбер ҙә алыҫайта алмай. Элек фестивалгә килгән коллегаларымдан ғына ишетеп белгән Башҡортостанға, башҡорттарға ла тәү күреүҙән ғашиҡ булдым. Урал илендәге быға тиклем ишетеп кенә белгән ҡәрҙәштәремдең тыуған ерен күреп, аралашып, башҡорт халҡы тураһында ишеткән-белгәндәремә раҫлау алдым.

***Айәун АЙҒУНОВ, Дағстан республикаһының Ҡумыҡ дәүләт музыка-драма театрының художество етәксеһе:*** Беренсе тапҡыр Башҡортостандамын. Республиканың баш ҡалаһы тураһында шуны әйтергә була: архитектураһынан, ҡала төҙөлөшөнән башлап, бында йәшәгән кешеләренә тиклем барыһы ла матурлыҡҡа, именлеккә, йәшәү кимәленең юғарылығына ынтыла. Ҡала төҙөк, таҙа, халыҡ ҡунаҡсыл, һөйкөмлө. Ошондай ҡалала төрки халыҡтарын йыйған фестиваль үтеүе - ул бар төрки халыҡтарының еңеүе, берләшеүе. Беҙ бөтәбеҙ ҙә ошо еңеүҙә ҡатнаштыҡ, теләктәшлек белдерҙек.

Бөгөнгө көндә Рәсәйҙә лә, Дағстанда ла күңелһеҙ ваҡиғалар булып тора, шартлауҙар яңғырай, кешеләр һәләк була. Һәм ошондай кире күренештәр фонында беҙҙең фестивалгә йыйылыуыбыҙ - үҙе бер еңеү ул. Сәнғәт кешеләре берҙәм һәм улар үҙ заманы, халҡы, йәмғиәте, уларҙың проблемалары менән йәшәй. Быны беҙ фестивалдә күрһәткән спектаклдәрҙә лә сағылдырырға тырыштыҡ. Беҙҙең теләктәшлек, берҙәмлек әхлаҡ, иман, рухиәт еңеүенә, тормошобоҙ сәскә атыуына килтерәсәк, тигән ышаныс менән ҡайтып китәм был фестивалдән.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ДӘҒҮӘСЕЛӘРЕМ АЛДЫНА...

## батыр ҡыҙ булып барып баҫам



**Ошо көндәрҙә Рәсәй спорты донъяһында тағы ла бер ҡыуаныслы яңылыҡ булды: "Рәсәй шашкасылары Францияла үткән шашка буйынса донъя кубогында тәүге урындарҙы яулаған!" Был хәбәр беҙҙең өсөн бигерәк тә ҙур ҡыуаныс итеп ҡабул ителде, сөнки еңеүселәр араһында башҡорт йәштәре - Айнур Шәйбәков менән Айгөл Иҙрисова ла бар. Биш тапҡыр донъя чемпионы Тамара Танһыҡҡужинаны тәрбиәләгән Ишембай шашка клубы осорған ҡошсоҡтар улар икеһе лә. Уларҙың береһе -Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика лицей-интернатының 11-се синыф уҡыусыһы, спорт мастеры Айгөл ИҘРИСОВАны сәфәрҙән ҡайтыу менән редакцияға саҡырҙыҡ. Донъяның ҡатын-ҡыҙ шашкасылары араһындағы турнирҙа блиц, йәғни иң ҡыҫҡа ваҡытлы шашка уйыны оҫталарының-оҫтаһы, өмөтлө спортсы, уҡыу алдынғыһы, шашкала ун аҙымды алдан күҙаллау һәләтенә һәм феноменаль хәтерләү ҡеүәһенә эйә әңгәмәсебеҙгә һүҙ бирәйек.**

**(Дауамы 12-13-сө биттәрҙә).**

✓ *Айырыуса ҡурай моңо күңелемә ятты, ҡайһы бер сығыштарҙы хатта яҙҙыртып та алдым. Ҡурай башҡорттоң йәне, тип бушҡа ғына әйтмәйҙәр икән.*



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Туғанлыҡ" Халыҡ-ара төрки телле театрҙар фестивалендә ҡатнашҡан ҡунаҡтар Өфө, Башҡортостан тураһында ниндәй фекерҙә?




**(Башы 1-се биттә).**

**Аҡылбек АБДЫҠАЛЫПОВ, Ҡырғыҙстандың халыҡ артисы, режиссер:** Совет осоронда беҙ бер-беребеҙҙе юғалттыҡ. Арабыҙҙа мөнәсәбәттәр һыуынды, бәйләнештәребеҙ битарафлыҡҡа килеп бәрелде. Беҙ бер- беребеҙҙе белгән, әммә арабыҙҙа бер ниндәй ҙә мәрхәмәтлек ҡалмаған халыҡтарға әйләндек. Беҙҙең халыҡтарҙа бер ген, тел, ҡиәфәт - күп нәмәләр оҡшаш. Ләкин беҙ ошо оҡшашлыҡтарҙы онота яҙған, төрлө яҡтарға бәргеләнгән халыҡтар. Беҙ ваҡыт тиҙ аҡҡан, донъя тиҙ үҙгәргән осорҙа юғалдыҡ, шуға күрә лә бөгөнгө көн маҡсаттарыбыҙ ошо ептәрҙе нығытыу булырға тейеш. Сәнғәт ошо ептәрҙе нығытыу өсөн бер сара ул. Элекке традицияларҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе онотмай, шулар нигеҙендә яңы үҙаң барлыҡҡа килтереү сараһы. Эйе, бары берләшеп кенә беҙ көслө була алабыҙ. Был берләшеү кемгәлер ҡаршы көрәш өсөн түгел, ә глобалләшеү шарттарында телдәребеҙҙе, мәҙәниәттәребеҙҙе, милләттәребеҙҙе һаҡлап ҡалыу өсөн кәрәк. Аралашып йәшәгәндә генә ҡыйынлыҡтарҙы лайыҡлы, еңел үтергә була. Заман көрсөктәре лә беҙҙең матди яҡтан ярлыланыуыбыҙҙан түгел, ә беҙҙең рухи тамырҙарыбыҙҙың, туғанлыҡ ептәребеҙҙең өҙөлөүенән килә.

**Илһам ГУСЕЙНОВ, Әзербайжан милли академия драма театры артисы:** Фестивалгә саҡырыу алғас, төрлө уйҙа булдыҡ. Берәүҙәребеҙҙең күңеле күтәрелеп китте. Ошондай яҡшы фестивалгә килеү ҙур мәртәбә һанала ине беҙҙең өсөн. Өфөнө, Башҡортостанды күреү теләге көслө ине. Әлбиттә, беҙҙең хайран итер нәмәләр күрергә әллә ни өмөт итмәгәйнек. Әммә Өфөгә аяҡ баҫҡас, унының матур, һоҡландырғыс ҡала булыуына хайран ҡалдыҡ. Республикағыҙ тураһында алдан интернет селтәре аша танышҡайныҡ. Бында иһә барыһын да үҙ күҙҙәребеҙ менән күрҙек. Быға тиклем Салауат Юлаев исемендәге көслө хоккей командаһын белә инек, Башҡортостанға килгәс, был геройҙың һәйкәлен күргәс, уның тураһындағы һорауҙарыбыҙға яуап та алғас, батырығыҙ менән ғорурланыу беҙҙең күңелдәрҙе лә тултырҙы.

Аралар алыҫ булһа ла, аралашып йәшәргә тейешбеҙ. Сөнки беҙ бер туған халыҡтар. Араларыбыҙҙа рухи һәм ҡан ҡәрҙәшлеге бар. Бер-беребеҙҙең телендәге күп һүҙҙәрҙе аңламаһаҡ та, рус телендә аралашһаҡ та, ҡәрҙәшлегебеҙ беҙҙең күҙҙәребеҙҙә, йөҙҙәребеҙҙә, йөрәгебеҙҙә бит. Беҙҙең бөтәбеҙҙе лә бүре ғорурлығы, бер ҡасан да, бер кемдән дә ҡурҡмай, һуңғы көскә тиклем алышырға әҙер булған рух көсө берләштерә.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ яҙып алды.**

***Вәкиф АЛИЕВ, Әзербайжан Республикаһының мәҙәниәт һәм туризм буйынса министр урынбаҫары:*** Мин Өфө ҡалаһында тәүге тапҡыр. Баш ҡаланың урамдары киң, иркен булыуы оҡшаны, торлаҡ йорттары, заманса биналар төҙөлөүе, шәхси секторҙың үҫеше был ҡаланың киләсәге өмөтлө булырына инандыра. Ә башҡорт мәҙәниәте, милли үҙенсәлегенә килгәндә, төрки халыҡтарының уртаҡ тамырҙары хатта милли аш-һыуҙа ла күренә. Һәр урында беҙҙе ҡымыҙ менән һыйланылар. Был эсемлектең тәме беҙҙә әҙерләнгән айранға тартым. Бынан тыш, Башҡортостанда әҙәби мираҫҡа ҡарата ҡараш, милли үҙенсәлекте, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе һаҡлау буйынса күрелгән саралар һоҡландырҙы. Ул ғына ла түгел, мин Башҡортостан халҡына, өфөләләргә интеллигенттарса көнләшәм. Сөнки ҡалала йәштәр, студенттар бик күп. Тамырҙарҙы танытыр, йолаларҙы өйрәтер өсөн милләттең киләсәген ышанып тапшырырлыҡ нигеҙ үҫеп килә.

***Елена МИЩЕНКО, Жамбыл исемендәге Көнсығыш Ҡаҙағстан өлкә драма театрының музыкаль биҙәүсеһе:*** Өфө буйлап аҙ ғына сәйәхәт итеүебеҙгә ҡарамаҫтан, ул минең күңелемә бик үҙенсәлекле, боронғо архитектура өлгөләре менән бер рәттән, заманса күп ҡатлы йорттары, киң урамдары, йәшеллеге менән хуш килде. Инде көҙ етеүгә ҡарамаҫтан, урамдарҙы сәскә түтәлдәре биҙәй, ағастар күп. Бигерәк тә боронғо архитектура өлгөләре күп һаҡланып ҡалыуы оҡшай. Сөнки мин үҙем ағастан булһынмы, таштанмы эшләнгән бәләкәй йорттарҙы ябатам. Бигерәк тә шундай бейек, ҙур таш биналар араһынан семәр йөҙлөклө тәҙрәләре менән иғтибарҙы йәлеп итеп ултырған бәләкәй генә ағас йортто күреп ҡалыу йөрәккә шундай йылы бөркә. Өфөнө мин был тиклем ҙур ҡала икән тип күҙ алдыма килтермәгәйнем, әммә уға ингән саҡта дөрөҫ юлды тапмай аҙашып йөрөнөк. Шул ваҡытта уның сиктәрен самаланым да инде.

***Жанна ҠОРМАНҒӘЛИЕВА, Ҡаҙағстан Республикаһы Мәҙәниәт министрлығының яуаплы секретары:*** Өфөгә тәүге тапҡыр килеүем. Ҡаҙаҡтар менән башҡорттарҙы берләштереүсе уртаҡлыҡтар күп, уртаҡ тарих, оҡшаш тел. Шуға күрәме, минең өсөн Ғата Сөләймәновтың тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған концерт барышында тәржемәнең кәрәге булманы, тулыһынса аңлап ултырҙым. Концерт шул тиклем сағыу тәьҫораттар ҡалдырҙы. Фольклор, милли уйын ҡоралдары, халыҡ көйҙәре кешелектең берҙәмлеген, бигерәк тә төрки халыҡтарының уртаҡ тамырҙарын, ҡәрҙәшлеген сағылдырған, иҫебеҙгә төшөрөп торған әйберҙәр, тип иҫәпләйем. Айырыуса ҡурай моңо күңелемә ятты, ҡайһы бер сығыштарҙы хатта яҙҙыртып та алдым. Ҡурай башҡорттоң йәне, тип бушҡа ғына әйтмәйҙәр икән. Ҡурай үткәндәрҙе, бөгөнгөнө сағылдырыусы ғына түгел, ул киләсәккә яҡты уйҙар менән атларға өндәүсе лә. Башҡорттоң ҡурайы, ҡаҙаҡтың думбыраһы йә башҡа төрки телле халыҡтарҙың милли уйын ҡоралдары мәңге йәшәйәсәк. Нәҡ улар беҙҙең күңелдәргә илһам бирә, өмөт өҫтәй, киләсәккә ышаныс менән ҡарарға этәрә.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!




# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле етте. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**

- Шулай итеп, 2013 йылдың тәүге яртыһына **50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 360 һум 24 тингә яҙылырға була**. Сентябрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе 4 уҡыусыбыҙға - М. Әхтәмовтың "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре", 10 уҡыусыға - Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек", 10 уҡыусыға - "Айыҡ туй сценарийҙары", 10 уҡыусыға Әхмәр Үтәбайҙың "Мин айыҡ тормош башланым" китаптарын бүләк итәсәкбеҙ.
- Ә кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.
- **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.
- **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Президенты 2012 йылғы Паралимпия уйындары чемпиондары һәм медалистары Оксана Савченко, Алексей Лабзин, Александр Неволин-Светов, Елена Паутова, Михаил Зимин, Анастасия Овсянникова, Андрей Коптев, Анна Сорокина, шулай уҡ Паралимпиада-2012 призеры Илья Первухин менән осрашты һәм уларға фатир алыуға сертификаттар тапшырҙы

✓ Республика парламенты Президиумы ултырышында уның спикеры Константин Толкачев Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың юғары наградаларын тапшырҙы. Был наградаларға БР беренсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы депутаты Рауил Яппаров, Өфөнөң Дезинфекция станцияһы баш врачы Александр Мочалкин, Ҡалтасы районы муниципаль район хакимиәте башлығы Рәүис Нуретдинов, Күгәрсен районы хакимиәте башлығы Фәрит Мусин лайыҡ булды.

✓ БР Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Хәйҙәр Вәлиев республиканың киң мәғлүмәт саралары журналистары менән осрашты һәм буласаҡ муниципаль һайлау кампанияһы хаҡында һөйләне. Хәйҙәр Вәлиев билдәләүенсә, Башҡортостанда 14 октябрҙә - Берҙәм тауыш биреү көнөндә 54 муниципаль район Советтарына депутаттар һайланасаҡ. Бынан тыш, ҡайһы бер ауыл биләмәләре Советтарына депутатлыҡҡа төп һәм өҫтәмә һайлауҙар, Дүртөйлө ҡалаһы ҡала биләмәһе Советына депутатлыҡҡа һайлауҙар, Туймазы ҡалаһы ҡала биләмәһе Советына депутатлыҡҡа өҫтәмә һайлауҙар үтәсәк.

✓ Башҡортостан Хөкүмәте 6 сентябрҙәге бойороғо менән ҡоролоҡ буйынса ғәҙәттән тыш хәл режимын бөтөрҙө, бындай режим 20 июлдән - республиканың 18 районында, 7 августан йәнә 28 районда һәм Өфө, Күмертау, Сибай ҡалаларында аномаль эҫе һауа торошо арҡаһында уңыш һәләк булыу айҡанлы индерелгәйне. Шулай уҡ урман янғындары таралыу айҡанлы төбәктең 19 районында айырым янғынға ҡаршы режим индерелгәйне.

✓ Күренекле башҡорт яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге республика дәүләт премияһы лауреаты Динис Бүләковтың "Ғүмер бер генә" һәм "Килмешәк" исемле романдары Төркиәлә нәшер ителгән. Ул Анкара ҡалаһының Этимесгут районы хакимиәте һәм "Бенгю" Евразия Яҙыусылар союзы менән берлектә ТӨРКСОЙ халыҡ-ара төрки мәҙәниәте ойошмаһы менән нәшер ителгән.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# АШАҒАНДА ҠОЛАҒЫҢ ҺЕЛКЕНҺЕН,

## эшләгәндә йөрәгең елкенһен…

**Ҡолаҡ һелкетеп ашауҙы, ауыҙ тултырып сортолдатып һағыҙ сәйнәүҙе гимнастикаға, спортҡа тиңләргә ниндәй нигеҙ бар, тиһегеҙме? Бер яҡтан ҡараһаң, был шаяртыу булып аңлашылған да һымаҡ. Нисек инде, Хоҙай биргән ризыҡты кеше ниндәйҙер гимнастика шарты менән ҡабул итергә тейеш, ашағанда гимнастика ҡайғыһымы, бигерәк тә асыҡҡан саҡта, тиер берәү. Әммә нигеҙ бар икән шул. Мәҫәлән, рәсми медицинала артикуляция гимнастикаһы, яңаҡ-йөҙ гимнастикаһы, сәйнәү, йотоу һәм мимика мускулдарын камиллаштырыуға булышлыҡ итеүсе гимнастика тигән термин-төшөнсәләр бар.**



Бала ҡасан һөйләшергә өйрәнә башлай тип уйлайһығыҙ? Уның өн сығарау һәләте тәнендәге ниндәй физиологик үҙгәрешкә тап килә? Әйтергә кәрәк, һөйләшеү өсөн телдән, ирендәрҙән, аңҡауҙан тыш, тағы ла иң кәрәге тештәр икән. Ҡыҫҡаһы, сабый әсәһенең күкрәк һөтө менән туҡланған, имгән саҡта һөйләшеү өсөн кәрәк булған тел, аңҡау һәм ирендәр мускулдарын үҫтерә үҫтереүгә, әммә фәҡәт тештәре сығып, уҙаллы ашай башлағас ҡына һөйләшә башлай. Тимәк, бала һөйләшерҙән алда иң тәүҙә ашарға өйрәнә. Ашаған саҡта һөйләшеү өсөн кәрәкле булған ағзалар күнекмә үтә, нығына һәм был процесс артикуляция гимнаситикаһының бер формаһы тип атала.

Ә нимә һуң ул, ғөмүмән, артикуляция? Артикуляция - теге йәки был өндө әйткәндә телмәр ағзаларының торошо, телмәрҙәге ҡатнашыу рәүеше, роле. Артикуляция гимнастикаһының маҡсаты һөйләшкәндә өндәрҙе дөрөҫ итеп әйтеү өсөн телмәр аппараты ағзаларының тулы ҡанлы һәм дөрөҫ хәрәкәтен барлыҡҡа килтереүгә ҡайтып ҡала. Тимәк, аныҡ һәм асыҡ итеп һөйләшеп өйрәнер өсөн иң тәүҙә ризыҡты тештәрең менән турап, матур итеп сәйнәп ашап өйрәнергә кәрәк. Әлбиттә, өндәр тештән сыҡмай, әммә теге йәки был өндө әйтер өсөн телдең, аңҡауҙың, ирендәрҙең билдәле йүнәлештәге хәрәкәте, бының өсөн яңаҡ мускулдарының эшләүе, техник телдә әйткәндә, мотор кәрәк. Ә инде яңаҡ мускулдарын фәҡәт ашау, һағыҙ сәйнәү хәрәкәте менән генә күнектереп була.

Ошо урында бер күренешкә иғтибар итегеҙ. Ашыҡып, сәйнәр-сәйнәмәҫ, эре-торо итеп йотоп ашаған кешенең телмәре лә дөрөҫ булмай. Ундай кеше хәбәр һөйләгәндә, сығыш яһағанда әйтергә телгән фекерен әйтеп бөтмәйенсә, икенсе юҫыҡҡа төшөп буталып бөтә, һүҙҙәрҙе асыҡ итеп әйтмәй, күп кенә өндәре йотолоп ҡала. Ундай кеше хаҡында "Ауыҙында һүҙҙән бутҡа бешерә, бытылдап һөйләшә", тиҙәр. Башта уҡ әйтеп китеүемсә, бөн фәкирегеҙгә лә ошо етешһеҙлек хас. Үҙендең һөйләгән хәбәрендә тыңлағанда етешһеҙлектәрендә күреп ныҡ ояланһың икән ул. Башҡортостан радиоһында, телевидениела эшләгән саҡта ла минә иң ауыры үҙем эшләгән тапшырыуҙарҙы тыңлауы булды. Әйткәндәй, бик күптәр өсөн үҙенең тауышы, һөйләү манераһы оҡшамай икән. Һәр хәлдә, үҙенең тауышын үҙе һоҡланып тыңлаған кешене мин ошоғаса осратҡаным юҡ әле.

Айырым өндө, һүҙҙе әйтеү өсөн тын кәрәкмәй ҙә һымаҡ, әммә һүҙҙәрҙе һүҙгә ялғау, телмәр тотоу өсөн дөрөҫ тын алыуың мөһим. Аныҡ артикуляция өсөн телмәр ағзаларының (тел, аңҡау, ирендәр) көслө, ҡатҡыл һәм етеҙ булыуы тәүшарт. Ә инде тауыш барлыҡҡа килһен өсөн тағы ла тын алыу ағзаларының, тамаҡтың, ҡуғырлайҙың, ҡурылдайҙың, үпкәләрҙең, күкрәк шаршауының, ҡабырға араларындағы мускулдарҙың ҡатнашыуы фарыз. Шуға күрә артикуляция гимнастикаһы хаҡында һүҙ алып барғанда беҙ йөҙ, ауыҙ ҡыуышлығы, күкрәк ситлеге, ҡулбаш билбауы мускулдарын сыныҡтырыуҙы күҙ уңында тотабыҙ. Тамаҡты, ҡуғырлайҙы, ҡурылдайҙы, үпкәләрҙе, күкрәк шаршауын беҙ башҡа төрлөсә, әйтәйек, ҡул менән тотоп күнектерә алмайбыҙ.

"Беҙ нимә ашаһаҡ, шул нәмәгә әүерeләбеҙ", тигән 701-762 йылдарҙа йәшәүсе Ҡытай шағиры Ли Бо. Тан династияһына ҡараған был шағир императорҙың ҡыҙына өйләнә, киләсәге өсөн бик уңышлы карьера яһау мөмкинлеге тыуһа ла, барыһынан баш тартып, ун һигеҙ йәшендә тауҙарға китә. Ул тәбиғәт биргән ризыҡ менән туҡланып, үҙенең үлемһеҙ әҫәрҙәрен ижад итеп ҡалдыра һәм ошондай уңышҡа өлгәшә алыуының серен шул туҡланыуҙа, тәбиғәт тормошо менән йәшәүендә күреп, ошо һүҙҙәрҙе әйтеп ҡалдыра.

Тел белгестәре беҙҙән телдә һаҡланған үҙенсәлекле өндәрҙең барлыҡҡа килеүен нострагик дәүергә, йәғни кешелектең әле халыҡтарға бүленмәгән дәүеренә алып барып бәйләй. Йәғни борон-борондан беҙҙең милләтең үҙгән тәшкил итеүсе ырыуҡәбиләләрҙең телдәре ни рәүешле генә яңғырамаһын, был өндәр уларҙың телендә булған һәм тел икенсегә үҙгәргән хәлдә лә, был өндәр һаҡланып ҡалған, йәғни тел үҙгәргән хәлдә лә, улар береһенән икенсеһенә күсеп килгән. "Башҡорт теленең грамматикаһы" авторы академик Н.К. Дмитриев был өндәрҙе башҡорт теленең башҡа төрки телдәрҙән айырыусы төп үҙенсәлек итеп билдәләй. Әле яныраҡ генетиктарҙың гаплатөркөм буйынса яһаған асышы башҡорт милләте этногенезы мәсьәләһен 14-15 мең йыллыҡ боронғо тарихҡа, таш быуатҡа алып барып бәйләү мөмкинлеген бирҙе. Шул уҡ ваҡытта тап шундай уҡ боронғолоҡҡа эйә халыҡтарҙың телендә лә шундай уҡ өндәр бар. Бында телселәргә һәм этнологтарға, антропологтарға ошо өндәрҙең барлыҡҡа килеү физиологияһын өйрәнеүгә бихисап фәнни мөмкинлектәр асыла. Ә бит Ли Бо әйтмешләй, бында бер үк ризыҡты бер үк төрлө ҡабул итеү һөҙөмтәһендә бер үк артикуляция күнекмәһе ярҙамында бер үк төрлө өндәрҙең барлыҡҡа килеүе хаҡында ла һүҙ алып барып була.

Ҡыҙыҡ өсөн генә, ауыҙығыҙға тултырып ризыҡ ҡабып, уны ҡолағығыҙ ҡыбырларлыҡ итеп ныҡлап сәйнәп ашап ҡарағыҙ. Ашаған саҡта кәрәкле булған барлыҡ ағзаларығыҙҙан тыш, тағы ла елкә мускулдарығыҙҙың да көсөргәнешле эшмәкәрлеген тойорһоғоҙ. Белеүегеҙсә, кешенең елкә, үңәс, ҡолаҡ янынан баш мейеһен арҡа мейеһе, үҙәк нервылар системаһы менән тоташтырыусы әллә күпме ҡан тамырҙары үтә. Һағыҙ сәйнәүҙең ҡатыу ҡалҡыуҙан, баш һәм йөрәк ауыртыуҙан һәм башҡа төрлө күп ауырыуҙарҙан арынырға булышлыҡ итеүе баш мейеһе менән арҡа мейеһен тоташтырыусы ҡан тамырҙары урынлашҡан муйын мускулдарына гимнастика булыуын да бында аңлауы ҡыйын түгел. Мәсьәләне ошо юҫыҡта ҡараһаҡ, ҡолаҡ һелкетеп ашауҙың кешенең һаулығына тағы ла әллә күпме ыңғай йоғонтоһон килтерә алабыҙ. Йөрәген елкендереп эшләр өсөн кешенең һау-сәләмәт булыуы тәүшарт, ә һау-сәләмәт булыуҙың тәүшарты дөрөҫ туҡланыуға, ризыҡты дөрөҫ ҡабул итеүгә бәйле. Ашау хәрәкәттәре йәғни артикуляция гимнастикаһы, шулай итеп, баш мейеһен ҡан менән тәьмин итеүҙе әүҙемләштерә, ә инде баш мейеһе эшмәкәрлегенә килгәндә, ул инде кеше организмы эшмәкәрлегенең һәр өлкәһенә бәйле. Йәғни һәр күҙәнәктең, һәр ҡан тамырының, һәр ағзаның эшмәкәрлеге фәҡәт үҙәк нервылар системаһына, баш мейеһенә бәйле. Иң башта һүҙ алып барғанса, һағыҙ сәйнәүҙең бихисап ауырыуҙарҙан арынырға булышлыҡ итеүен тик ошолай ғына аңларға була.

"Ашағанда ҡолағың һелкенһен, эшләгәндә йөрәгең елкенһен" әйтеме хаҡында һүҙ алып бара торғас, ана шундай философик һәм физиологик ҡатлауҙарға, тарих төпкөлдәренә барып сыҡтыҡ. Шуныһы бәхәсһеҙ: бик боронғо әйтем ул. Юҡҡа ғына халҡыбыҙҙың икенсе бер әйтемендә "Хәлең нисек? Ашауға ҡарап", тиелмәй.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Аҙағы. Башы 36-сы һанда.)**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓15 сентябрҙән Өфөлә ауыл хужалығы йәрминкәләре миҙгеле башлана. Ындай саралар Башҡортостандың баш ҡалаһында һәр шәмбе һәм йәкшәмбе көндәрендә 28 октябргә тиклем үткәреләсәк. 15 һәм 16 сентябрҙә йәрминкә Йәштәр һарайы алдындағы майҙанда ойоштороло. Бында өфөләләр картуф, йәшелсә, бал, ит, һөт аҙыҡтары һәм башҡа продукттар һатып ала аласаҡ. Һыуыҡтар башланыу менән йәшелсә йәрминкәләре туҡталасаҡ. Уның ҡарауы, 15 декабрҙән Өфөлә ит йәрминкәләре старт ала.

✓Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының булып үткән ултырышында БДБҠ Башҡарма комитеты рәйесе итеп Румил Аҙнабаев һайланды, быға са ул Башҡарма комитет рәйесе урынбаҫары вазифаһын башҡарҙы. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының элекке етәксеһе, Дәүләт Думаһы депутаты Марсель Йософов, Рәсәй парламентының түбәнге палатаһында эш күп булыу сәбәпле, был вазифанан бушатыуҙарын һораны. Йәмәғәт ойошмаһының Башҡарма комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары итеп Хәләф Ишморатов һайланды.

✓15 сентябрҙә Башҡортостанда, шулай уҡ Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә "Башҡарабыҙ!" исемле ҙур экологик акция үтә. Был көндө бөтә ил халҡы урамдарға, парктарға, урмандарға, күл һәм йылға буйҙарына уларҙы сүп-сарҙан таҙартыу өсөн өмәгә сығасаҡ. Бындай бер көнлөк акциялар "Let's do it!" ("Башҡарабыҙ!") хәрәкәтенең бер өлөшө булып тора һәм улар сентябрҙә бик күп илдәрҙә үтәсәк. Проектта ҡатнашыусылар фекеренсә, йәмәғәтселек иғтибарын тәбиғәттәге сүп-сар мәсьәләһенә йәлеп итеү һәм власть менән йәмәғәт ойошмалары араһында хеҙмәттәшлек булдырыу шулай уҡ мөһим.

✓Башҡортостандың Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы "Йәштәр проекты - 2012" республика йәштәр бизнес-проекттары һәм бизнес-идеялары конкурсы башланыуы хаҡында иглан итә. Конкурста 30 йәшкә тиклемге шәхси эшҡыуарҙар, бәләкәй эшҡыуарлыҡ субъекттары, шулай уҡ бизнес менән шөғөлләнгән йәштәр коллективтары ҡатнаша ала. Еңеүселәр "Иң яҡшы йәштәр бизнес-проекты" һәм "Иң яҡшы йәштәр бизнес-идеяһы" номинацияларында гранттар менән наградланасаҡ. Ғаризалар 3 октябргә тиклем Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 10, 271-се бүлмә адресы буйынса БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығында ҡабул итеlә. Белешмәләр өсөн телефон: (347) 251-57-23.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Матчта йәш уйынсы Никита Фәтиховтың айырыуса тиҙ, оҫта уйнауын билдәләргә кәрәк. Никита тәүҙә 4-се шайбаны индерҙе, һуңыраҡ 6-сы еңеүле шайба менән уйынға нөктә ҡуйҙы.*



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ДОНЪЯ ЧЕМПИОНАТТАРЫН...

## әҙерләнеп көтә Өфө

**Баш ҡаланың "Олимпик-парк" комплексы ошо көндәрҙә тулыһынса үҙгәреш кисерә. Унда тиҙҙән тау саңғыһы буйынса балалар спорт мәктәбе үҙ ишектәрен асасаҡ. Спорт мәктәбе VI Халыҡ-ара ҡышҡы балалар уйындарына әҙерлек сиктәрендә төҙөлә. Был хаҡта журналистар менән үткәрелгән матбуғат конференцияһында БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Александр Иванюта мәғлүмәт еткерҙе. Кәңәшмәлә шулай уҡ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Ринат Сәғитов менән Өфө ҡала округы хакимиәтенең спорт комитеты рәйесе Сергей Степанов та ҡатнашты. Улар ҙа ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәре менән бүлеште.**

Кәңәшмәлә спорт объекттарын төҙөкләндереү, уларҙың Өфө спортын үҫтереүгә, шулай уҡ VI Халыҡ-ара ҡышҡы балалар уйындарының кимәлен күтәреүгә булышлыҡ итәсәгенә ышаныс бағланыуы тураһында һүҙ алып барылды. Ринат Сәғитов әйтеүенсә, бөгөн Спорт һарайын төҙөкләндереү эше аҙағына яҡынлаша, был ҡоролманы ошо айҙа уҡ сафҡа индереү ҡаралған.

- Ҡаланы матурлау, төҙөкләндереү буйынса киң ҡоласлы эштәр башҡарыла: Уйындар ваҡытында ҡулланыласаҡ объекттарҙың тирә-яғы төҙөкләндерелә, светофорҙар яңыртыла, йорттарҙың тышҡы яғы тәртипкә килтерелә, - тине вице-мэр. Шулай уҡ ул Өфөлә ҡунаҡханалар етешмәү проблемаһына ла туҡталды. Уның һүҙҙәренә ҡарағанда, баш ҡалала тиҙҙән яңы ҡунаҡханалар барлыҡҡа киләсәк. Уларҙың бер-нисәһе төҙөлә лә башлаған. Шулай итеп, тиҙҙән был проблема ла хәл ителәсәк, тигән фекере менән уртаҡлашты телмәр тотоусы.

Александр Иванюта VI Халыҡ-ара ҡышҡы балалар уйындарына 16 ҡаланан ғариза килеүен билдәләне. АҠШ, Канада, Словения, Швеция һәм башҡа дәүләттәр спортсылары ҡатнашырға теләк белдергән. Ғаризалар ошо ай аҙаҡтарына тиклем ҡабул ителәсәк.

Спорткомитет рәйесе Сергей Степанов Уйындарҙы ойоштороу дирекцияһының эше тураһында белешмә бирҙе. Дирекция 6 йүнәлеш буйынса эшләй. Ул ниндәй спорт төрөнөң ҡайһы спорт объектында үтеүе менән таныштырҙы, ҡайһы бер ойоштороу моменттары тураһында ла әйтеп үтте. Мәҫәлән, WI-Fi интернетын Уфанет компанияһы тәҡдим итәсәк.

**ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...**

***Журналистар менән тағы бер осрашыуҙа Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Рәмил Дилмөхәмәтов етеп килгән тағы бер ҙур ваҡиға - 18-23 сентябрҙә Өфөлә үтәсәк XVII Бөтә донъя йәйге биатлон чемпионатына әҙерлек тураһында хәбәр итте. Рәмил Хөрмәт улы билдәләүенсә, бөгөнгө көндә Өфө ҡалаһы Йәйге биатлон ярышын ҡаршыларға әҙер, ошо көндәрҙә "Биатлон" Спорт-һауыҡтырыу комплексында трассаларға һыҙыҡтар төшөрөлә, комплекстың тирә-яғы йәшелләндерелә. Ярышта ҡатнашыусыларға килгәндә, йәмғеһе 18 илдән 153 спортсы ҡатнашасағы билдәле булды. Чемпионат 19 сентябрь кис 19.30 сәғәттә "Биатлон" комплексында юниорҙар араһында үткәрелгән ҡатнаш эстафета ярыштары менән башланасаҡ. Рәмил Дилмөхәмәтов был ярыштарҙа донъяның киң билдәле биатлон йондоҙҙары килеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Был ярышта Өфө егете, өс тапҡыр донъя чемпионы Максим Чудовтың да ҡатнашыуы көтөлә, әммә ул әлегә алдағы ярышта алған травманан һуң Австрияла Рәсәй командаһы планы буйынса үҙаллы шөғөлләнә.***

**Илгиз РӘХИМОВ әҙерләне.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Ошо көндәрҙә Өфө ҡалаһының В.И. Ленин исемендәге майҙанында тыныс ҡына көйшәп торған бер һыйыр һәм уға аптырап ҡарап торған бер малай күренешенә шаһит булғайныҡ. Биш йәштәр тирәһендәге был малайҙың күҙҙәрендә аптырау ҙа, шатлыҡ та бар, үҙе әсәһенән ниҙер һорарға итә. Бер ваҡыт малайҙың ауыҙынан зәһәр ҙә, бер ҡатлыраҡ та һорау яңғыраны: "Әсәй, мин һыйырҙың ҡайһы еренән һөт сыға икәнен белдем инде хәҙер, ә бына ҡаймағы ҡайҙан сыға һуң ул?.."**

# ҠАЙМАҒЫ ҠАЙҘАН СЫҒА?



Юлай Кәримов фотоһы.

Үткән ял көндәрендә баш ҡала халҡы һәм Өфө ҡунаҡтары ошондай үҙенсәлекле тамашаларға һәм һөйләшеүҙәргә шаһит булды. Ҡаланың иң билдәле майҙандарының береһендә Бөтә Рәсәй "Һөт иле-2012" үтте. Был байрамда, әкиәттәгесә, һөт йылға булып аҡты, хатта фонтан булып атылды. Килеүселәр иғтибарына Башҡортостанда етештерелгән һөт продукцияларының әллә нисәмә төрө күрһәтелде. Сарала Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ҡатнашты. Уның билдәләүенсә, был сара ҡала халҡының иғтибарын үҙебеҙҙә етештерелгән һөт продукцияларына йәлеп итеү өсөн үткәрелә.

Сарала тамаша ҡылып йөрөүселәр менән һөйләшәбеҙ. Балалар табибәһе Флүзә Маликоваға бигерәк тә һөт фонтаны оҡшаған. Һигеҙ йәшлек улы Таһир тәүге тапҡыр тере һыйырҙар күреп ҡыуанған. Әйткәндәй, был байрамда һауын бейәләрен дә, һыйырҙарҙы ла күреп ҡыуаныусылар бер Таһир һәм алдараҡ "Ҡаймағы ҡайҙан сыға икән?" тип һораған малай ғына булмағандыр. Төрлө мәктәптәрҙән килгән уҡыусы балаларҙың күбеһе шул малдар фонында фотоға төштө, хатта уларҙы тотоп ҡараны. Уҡытыусы Гүзәл Фролова ла үҙенең 8-се класс уҡыусыларын алып килгәйне. "Балаларға бушлай һөт эсеү бигерәк оҡшаны", - тине. Ә ул үҙе күптән эҙләгән ҡыҙыл эремсек һатып алыу өсөн ҡыуаныуын йәшермәне. Сөнки, әңгәмәсебеҙ әйтеүенсә, ҡыҙыл эремсек эшләү Өфө тирәһендә һаҡланып ҡалмаған. Баймаҡ, Әбйәлил яҡтарында ғына етештерәләр был милли аҙыҡты.

Һөт байрамында 119-сы Өфө йылҡы заводы ла ҡатнашты. Ойошманың баш зоотехнигы Әҡрәм Хөсәйенов һүҙҙәренә ҡарағанда, бөгөн күптәр ҡымыҙҙың шифаһын баһалап еткермәй, хаҡын да юғары тип һанай. Тик улар был эсемлектең һаулыҡҡа ни ҡәҙәр ҡиммәтле булыуы тураһында хәбәрҙар булһа, ҡарашын үҙгәртер ине.

Сараның иң ҡыҙған мәле - Рәсәйҙә тиңе булмаған рекорд ҡуйып, ҡатнашыусыларға 7 мең литр һөт эсереү булғандыр. Тере сират һыу буйы һуҙылды, теләһәң, шартлағансы эсеү мөмкинлеге лә бар ине. Шулай ҙа, һуңынан билдәле булыуынса, Рәсәй рекордтар китабының баш мөхәррире Алексей Свистуновтың, эселгән һөт күләмен бушаған ҡаптарҙан һанап, был сараны ул китапҡа индермәҫкә ҡарар итеүе бер аҙ күңеле төшөрҙө.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Сара барышында кемдәргә генә мөрәжәғәт итмәһәк тә, барыһы ла ҡәнәғәт ине. Ә беҙгә, ололарҙан "аҡты исрафламағыҙ, ергә түкмәгеҙ" тигән тыйыуҙарҙы ишетеп үҫкән кешеләргә, һөт фонтаны ғына бер аҙ ризаһыҙлыҡ тыуҙырғайны тыуҙырыуға, ләкин, бәхеткә күрә, ул фонтан һөттән булмай сыҡты.**

**Илгизәр БУЛАТОВ.**

ХОККЕЙ

# ЕҢЕҮҘӘР КҮҢЕЛЛЕ ЛӘКИН...

**Континенталь хоккей лигаһы чемпионатын "Салауат Юлаев" командаһы элек бер ҡасан да булмағанса үтә насар башланы. "Өфө-Арена"ла тәүге ике уйындың икеһен дә отторҙо. Мәскәү өлкәһе Чехов ҡалаһының "Витязь" командаһы матчта буллиттар серияһында 3:2 иҫәбе менән өҫтөнлөк алды. Череповец ҡалаһының "Северсталь" командаһынан 3:1 иҫәбенә еңелде.**

Өсөнсө уйында "Салауат Юлаев" Белоруссияның баш ҡалаһынан "Динамо"ны ҡабул итте. "Динамо" әле генә Ҡаҙанда "Аҡ Барс" командаһын еңеп килгәйне. Күренеүенсә, "Динамо" - бик көслө команда, "Аҡ Барс"ты еңеү быны тағы бер тапҡыр раҫлай.

Трибуналарҙағы ҡайһы бер урындарҙың буш булыуы көйәрмәндәрҙең юлаевсыларҙың еңеүенә өмөтөн өҙөүен дә аңлатҡандыр. Шулай ҙа уларҙың күбеһе "Салауат Юлаев"ҡа тоғро һәм һәр саҡ уның еңеүҙәренә ышана. Был юлы ла шундай ышаныс менән килде улар "Өфө-Арена"ға. Уйын ике яҡтың да көслө һөжүме менән башланды. Шулай ҙа юлаевсыларҙың өҫтөнлөгө ныҡ һиҙелде. Беренсе осорҙоң 13-сө минутында Денис Хлыстов тәүге шайбаны ҡунаҡтар ҡапҡаһына ырғытты. Ҡунаҡтар осор ахырында ғына иҫәпте тигеҙләй алды.

Икенсе осорҙа юлаевсылар, уйын дилбегәһен үҙ ҡулдарына алып, көслө, һөҙөмтәле һөжүм ойошторҙо. Тәүҙә Мирослав Блатяк 2-се шайбаны ҡунаҡтар ҡапҡаһына йүнәлтте. Бынан һуң күп ваҡыт үтмәне, Юрий Трубачев иҫәпте 3-кә еткерҙе. Матчта йәш уйынсы Никита Фәтиховтың айырыуса тиҙ, оҫта уйнауын билдәләргә кәрәк. Никита тәүҙә 4-се шайбаны индерҙе, һуңыраҡ 6-сы еңеүле шайба менән уйынға нөктә ҡуйҙы. Шул ике арала Игорь Григоренко 5-се голдың авторы булды.

Өсөнсө осорҙа әллә ни ҙур үҙгәрештәр булманы. Матч 6:3 иҫәбе менән тамамланды.

Әйткәндәй, кесаҙнала "Салауат Юлаев" "Авангард" менән уйнаны һәм буллиттар серияһында 1:2 иҫәбе менән отолдо. Йәл, әлбиттә.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓10 сентябрҙән Өфөлә территорияларҙы таҙартыу һәм төҙөкләндереү буйынса айлыҡ старт алды. Ул 10 октябргә тиклем дауам итәсәк. Экологик айлыҡ сиктәрендә Өфөлә аҙна һайын санитар йомалар һәм дөйөм ҡала өмәһе ойоштороласаҡ. Өмә 29 сентябргә билдәләнгән. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 2011 йылдың көҙөндә экологик айлыҡ барышында 30 мең кубометрҙан ашыу сүп-сар сығарып түгелде. Сараларҙа 414 мең өфөлө ҡатнашты.

✓2012 йылдың 1 ғинуарынан бер юлы ике һәм өс игеҙ балаһы тыуған ғаиләләргә дәүләт ярҙамын һығыты өсөн һәр сабыйға өс йәштәре тулғансы ай һайын 500 һум күләмендә балалар пособиеһы түләү ҡаралғайны. Быңдай пособие ағымдағы йылдың 1 ғинуарынан бер юлы ике һәм өс игеҙ балаһы тыуған, йән башына уртаса килеме йәшәү минимумынан икеләтә дәүмәленән артмаған ғаиләләргә түләнә. 2012 йылдың 1 июненән йәшәү минимумының икеләтә дәүмәле тәбәктә 10970 һум тәшкил итә. 2012 йыл аҙағына республикала ике һәм өс игеҙ бала өсөн балалар пособиеһы алған кешеләр һанының 900-гә етеүе көтөлә.

✓Өфөлә, Достоевский һәм Ленин урамдары мөйөшөндә юл билдәләрен ҡабатлаған инновацион билдәләр төшөрөлдө. Улар термопластиктан эшләнгән. Билдәләр һауа температураһы үҙгәреүенә, химик һәм метеорологик тәьҫиргә тулыһынса яраҡлаштырылған. Әйтеүҙәренсә, термопластиктан яһалған юл билдәләре күпкә оҙағыраҡ хеҙмәт итә. Уларҙың составына ҡараңғыла яҡтыра торған бәләкәй быяла шарҙар инә. Билдәләр төҫлө һәм ҙур итеп эшләнгән, быларҙың барыһы ла водителдәрҙең күреү мөмкинлеген яҡшыртасаҡ. Быңдай билдәләр Рәсәйҙең бихисап ҙур ҡалаларында уңышлы ҡулланыла. Өфөлә был әлегә һынап ҡарау маҡсатында ойоштоpола.

✓Башҡортостан делегацияһы ТӨРКСОЙ ағзалары булған илдәрҙең ЮНЕСКО эштәре буйынса милли комиссиялары һәм комитеттары вәкилдәренең өсөнсө кәңәшмәһендә ҡатнашасаҡ. Сара Астанала 13-14 сентябрҙә үтә. Сарала төрки телле халыҡтарҙың тәбиғәт ҡомарткылары, мәҙәни һәм документаль мирасы объекттарын һаҡлап ҡалыу мәсьәләһе иғтибар үҙәгендә буласаҡ. БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, был кәңәшмәлә шулай уҡ республикала "Башҡортостан Уралы" биосфера резерватын булдырыу мәсьәләһе лә тикшереләсәк.

*✓ Башҡортостанда ошондай хәрәкәт ойоштороуға сәбәптәр булғанына аптыраны улар. "Башҡорттарҙы беҙ мосолмандар тип беләбеҙ, шуға ла һеҙҙең республикала эскелектең тамыр йәйеүен белмәй ҙә инек" - тип, хәүеф белдерҙеләр.*



*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*



# ҺАУЛЫҠТЫ ҺАТЫП АЛЫРБЫҘМЫ?

**Тиҙҙән поликлиника һәм больницаларҙа түләүле медицина хеҙмәттәре күрһәтеү буйынса яңы ҡағиҙәләр эшләй башлаясаҡ. Ләкин пациенттар хоҡуҡтарын яҡлаусыларҙа был борсолоу тыуҙыра. Медицина ярҙамы күрһәтеүҙең ниндәй төрҙәре түләүһеҙ булыр һуң ?**

"Граждандарҙы дауалау һәм уларҙың сәләмәтлеген һаҡлау буйынса бөтә төр ярҙам да бушлай буласаҡ", - тигәйне әлеге РФ һаулыҡ һаҡлау министры Вероника Скворцова былтыр РФ Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары сағындағы бер әңгәмәһендә. Һәм шул ыңғайҙа ошондай асыҡлыҡ та индергәйне: "Граждандарҙың һаулығын һаҡлау нигеҙҙәре тураһында"ғы закон буйынса беҙгә тәүге медицина-санитар (йәғни поликлиникаларҙа амбулатор дауаланыу), махсуслаштырылған, шул иҫәптән юғары технологиялар ҡулланылған медицина ярҙамы (ҡиммәтле тикшеренеүҙәр һәм операциялар), ашығыс, шулай уҡ паллиатив (һауығырына өмөт булмаған пациенттарҙың һыҙланыуын баҫыусы) медицина ярҙамы бушлай күрһәтелергә тейеш. Бынан тыш, Закон стационарҙа пациенттың ғүмере өсөн кәрәкле һәм мөһим препараттар менән дауаланғанда, көндөҙгө стационарҙа һәм ашығыс ярҙам күрһәтелгәндә дарыуҙарҙы бушлай алыу мөмкинлеге бирә. Ҡайһы бер осраҡтарҙа ауыр операциянарҙан һуң артабан шифаханаларҙа бушлай дауаланыу мөмкинлеге лә бар.

Тәү ҡарашҡа, борсолорға урын юҡ һымаҡ, ләкин пациенттар хоҡуҡтарын яҡлаусылар саң ҡаға: шул уҡ Закон (иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, ул ошо йылдың 1 ғинуарынан көсөнә инде) дәүләт поликлиникаларына һәм больницаларға бушлай медицина ярҙамы менән бер рәттән, түләүле хеҙмәттәр күрһәтергә рөхсәт итә. "Медучреждениеларҙың мөмкин тиклем күберәк аҡса эшләргә тырышыуы көн кеүек асыҡ һәм улар пациенттарҙы түләүле юлға баҫырға мәжбүр итеү өсөн бөтәһен дә эшләйәсәк", - ти Пациенттар лигаһы президенты А.Саверский. Мәҫәлән, бушлай тейеш булған анализдар тапшырыуҙы һәм табиптың ҡабул итеүен алдан яҙылыу аша кәмендә ике аҙнанан һуң ғына тәҡдим итәсәктәр, ә аҡса түләгән хәлдә былар минут эсендә хәл ителәсәк. Шулай ҙа Министрлыҡта, быға юл ҡуйылмаҫ, тип ышандыралар.

Яңы ҡағиҙәләр бер аҙ тынысландыра төшә, унда беҙҙең бушлай медицина ярҙамына хоҡуҡтарыбыҙҙы яҡларға һәм һаҡларға тейешле бер нисә пункт бар. Мәҫәлән, түләүле медицина хеҙмәттәре бушлай медицина ярҙамы дәүләт программаһында ҡаралған дауаланыу, тикшеренеүҙәр төрҙәре һәм башҡа процедуралар урынына күрһәтелергә тейеш түгел ( 10-сы пункт). Был, тимәк, әгәр пациентҡа медицина күрһәтеүе буйынса, мәҫәлән, УЗИ үтергә кәрәк икән, ул үҙенең ҡәҙимге полисы менән килә лә үтә, ә поликлиника уға түләүле хеҙмәт тәҡдим итергә тейеш түгел. Киреһенсә, медучреждение бушлай ярҙам алыуҙың бөтөн башҡа мөмкинлектәре хаҡында уға тулы мәғлүмәт бирергә бурыслы. Яңы ҡағиҙәләрҙе эшләүселәр уйынса, дәүләт һәм муниципаль медучреждениелар аҡса эшләүҙе түләүле хеҙмәттәр өсөн юғары кимәлдә уңайлы шарттар булдырыу юлы менән тормошҡа атҡара ала. Бына тап шунда тыуа ла инде борсолорға урын, сөнки ҡайҙа бөтә бушлай минимум, ҡайҙа аҡса һауыу башлана - бер кем бер ни белмәй.

Бына ниндәй осраҡтарҙа дәүләт һәм муниципаль поликлиника һәм больницалар түләүле медицина ярҙамы тәҡдим итә ала:

- медицина ярҙамына аноним рәүештә мөрәжәғәт иткәндә;
- дауалаусы табиптың йүнәлтмәһенән тыш, ниндәйҙер тикшереү һәм процедуралар үтеүгә үҙаллы ниәтең булғанда;
- медицина күрһәтеүе булмаһа ла аҙ урынлы палатаға урынлашыу өсөн (әйткәндәй, медицина күрһәтеүе булһа, бындай палатала урын бушлай бирелә);
- шулай уҡ 4 йәштән өлкән булған балаһы менән ата-әсәне урынлаштырғанда.

**Хоҡуҡ яҡлаусылар тағы бер нәмә өсөн борсола:** тәү сиратта түләп ҡаралыусы пациенттарға өҫтөнлөк биреп, дөйөм сиратты һанламау арҡаһында башҡа ауырыуҙарҙың да тиҙерәк ҡаралыу өсөн аҡса түләргә мәжбүр ителеүе бар. Был йәһәттән шуныһы ла мәғлүм булһын: тиҙҙән медицина стандарттары һәм дауаланыу тәртиптәре тураһында документ ғәмәлгә инәсәк, унда медицина тикшеренеүҙәре һәм башҡа процедуралар сроктары күрһәтеләсәк. Шуға күрә, әгәр хоҡуҡтарығыҙ боҙолоуға юл ҡуйыла ҡалһа, был хаҡта юғарыраҡ инстанцияларға ялыу менән мөрәжәғәт итергә бер ҙә тартынмағыҙ.

**Бушлай тейеш медицина хеҙмәттәре:**

- тәүге медицина - санитар ярҙам;
- ашығыс медицина ярҙамы;
- юғары технологиялы медицина ярҙамын да иҫәпкә алып, махсуслаштырылған медицина ярҙамы.

Мотлаҡ медицина страховкаһы (ОМС) сиктәрендә түбәндәге ауырыуҙар бушлай дауалана:

- йоғошло һәм паразитар сирҙәр ( енси юл аша йоҡторолған сирҙәр, туберкулез, ВИЧ-инфекция, СПИД ауырыуҙарын иҫәпләмәйенсә - улар айырым дәүләт программалары сиктәрендә дауалана) ;
- организмда барлыҡҡа килгән яңы үҙгәрештәр;
- эндокрин системаһы сирҙәре;
- туҡланыу һәм матдәләр алмашыныуының боҙолоуы;
- нервылар системаһы сирҙәре;
- ҡан сирҙәре;
- иммунитет механизмын үҙгәртеүсе айырым сирҙәр;
- күҙ һәм ҡолаҡ ауырыуҙары;
- ҡан әйләнеше системаһы ауырыуҙары;
- тын юлдары ағзалары сирҙәре;
- аш һеңдереү ағзалары сирҙәре;
- һейҙек юлдары системаһы сирҙәре;
- тире һәм тире аҫты күҙәнәклек туҡымаһы сирҙәре;
- һөйәк-мускул системаһы сирҙәре;
- йәрәхәт, ағыуланыу һәм тышҡы сәбәптәрҙең башҡа төр эҙемтәләре;
- тыумыштан килгән аномалиялар;
- йөклөлөк, бала табыу, бала тыуғандан һуңғы осор, ауырҙы төшөртөү;
- балаларҙың перинаталь осорҙа була торған хәле.

Теш ҡуйҙыртыу (ташламаға эйә граждандарҙан тыш) һәм косметология бушлай медицина ярҙамы исемлегенә индерелмәй.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

*ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ*

# АЙЫҠЛЫҠ ХӘРӘКӘТЕНӘ...

## Евразия ла эйәрмәксе

**Күптән түгел Ҡарасәй-Черкес республикаһының Домбай курорт ҡасабаһында "Домбай - 2012" Евразия йәштәре форумы үтте. "Евразия Союзы: бергә - яҡшыраҡ!" тигән девиз менән үткән был форум Рәсәйҙең һәм БДБ илдәренең иң әүҙем йәш ижтимағи-сәйәси берләшмәләр лидерҙарын (250 кеше) бергә туплаңы, уларҙы сәйәси һәм мәҙәни диалогтар, бәхәстәр майҙанына алып инде. "Рәсәйҙәге Кавказ халыҡтары конгресы" ("РКНК") тарафынан ойошторолған был форумда Евразия Союзы үҫешенә ҡағылышлы ҡайһы бер һорауҙар буйынса фекер алышынды, ул ғына ла түгел, йәштәр үҙҙәренең төрлө проекттарын, идеяларын да киң аудиторияға сығарыу мөмкинлеге алды. Домбай йыйыны өсөнсө тапҡыр уҙғарыла. Быйыл унда "Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт ойошмаһы рәйестәше Роберт Дәүләтшин да ҡатнашты. Булып үткән сара тураһында ул түбәндәгеләрҙе һөйләне.**

- Форумға йәмәғәт эштәрендә лә, спортта ла әүҙем эшмәкәрлек алып барған йәштәрҙе генә һайлап алғандар икән, был турала урынға килеп еткәс кенә аңғарттылар. Ысынлап та, йыйылған йәштәр араһында профессиональ спортсылар күп ине. Унан һуң, сараға ғалимдар, сәйәсмәндәр, тарихсылар, яҙыусылар саҡырылғайны һәм улар менән аралашыу, уларҙың сығыштары йәштәрҙә онотолмаҫ тәьҫораттар ҡалдырҙы. Сәйәсмәндәр сығышында Рәсәйҙең бөгөнгө дипломатик хәле тураһында ишеттек, улар көнүҙәк мәсьәләләр буйынса ла, мәҙәни, ижтимағи һәм иҡтисади йәһәттән дә Рәсәйҙең күп алдынғы илдәрҙән ҡалышыуы, иң аяныслыһы -Яҡын Көнсығыш илдәре менән дипломатик мөнәсәбәттәр, геосәйәси стратегия яйға һалынмауына ҡарата борсолоу белдерҙеләр. Бөтә был ябай булмаған хәлдән сығыуҙың берҙән-бер юлы - Рәсәйҙең имиджын тергеҙеү. Ә бының өсөн иң тәүҙә әхлаҡи ҡиммәттәр тергеҙелергә тейеш, тигән һығымтаға килде форумға йыйылыусылар.

Форумда миңә лә сығыш яһау форсаты тейҙе. Мин Башҡортостанда йәйелдерелгән айыҡлыҡ хәрәкәте тәжрибәһе менән уртаҡлаштым һәм Евразия берләшмәһе сиктәрендә "Айыҡ Евразия" тигән хәрәкәт булдырырға тәҡдим иттем. Беҙҙең тәҡдим форумда ҡатнашыусылар өсөн бик ҡыҙыҡлы тойолдо. Сөнки был Рәсәй һәм БДБ дәүләттәре халыҡтарының мәҙәнилеген үҫтереүгә этәргес булып тораcаҡ.

Башҡортостандағы айыҡлыҡ хәрәкәте, "Айыҡ ауыл" конкурсы тураһында ишеткәс, сараға йыйылыусы күптәр үҙҙәренең аптырауын йәшермәне. Юҡ, Рәсәйҙә был сараны ойошторған берҙән-бер һәм беренсе төбәк булғанға түгел, ә, ғөмүмән, Башҡортостанда ошондай хәрәкәт ойоштороуға сәбәптәр булғанына аптыраны улар. "Башҡорттарҙы беҙ мосолмандар тип беләбеҙ, шуға ла һеҙҙең республикала эскелектең тамыр йәйеүен белмәй ҙә инек" - тип, хәүеф белдерҙеләр. Сөнки беҙ беләбеҙ, күп кенә Кавказ республикалары өсөн эскелеккә ҡаршы көрәш актуаль түгел, уларҙа, мосолмандар йәшәгән төбәктә, бындай проблема юҡ. Улар фекеренсә, бындай проблема беҙҙә лә булмаҫҡа тейеш, ләкин...

"Домбай-2012" форумының төп әһәмиәтен билдәләп, шуны әйтеп китергә кәрәк: элек Рәсәй империяһы ҙур биләмәләргә эйә булған. Ә 90-сы йылдарҙан һуң ул тарая, бәләкәйләнә. Әммә шул сиктәрҙә лә Рәсәйгә яңы һулыш өрөү, уның ҡеүәтен арттырыу мөһим, ә был маҡсатты тормошҡа ашырыу өсөн, әлбиттә, һәләтле, белемле һәм айыҡ йәштәргә таяныу иң дөрөҫ йүнәлеш буласаҡ. Бына шул теләк бергә йыйғайны ла беҙҙе "Домбай-2012" форумына.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



### Гельминттар

Кистән уртаса ҙурлыҡтағы һуғанды таҙартып, ваҡ итеп турағыҙ һәм стаканға һалығыҙ. Стаканға бүлмә температураһына тиклем һыуытылған ҡайнаған һыу ҡойоп, иртәнгә тиклем ҡалдырығыҙ. Иртәгеһен һөҙөп, ас ҡарынға эсегеҙ.

### Бәшмәкле һәм трихомонадлы кольпит

500 грамм йыуылған һәм таҙартылған керән тамырын ҡырғыстан үткәреп, 1 литр ҡайнар һыу ҡойоғоҙ, ҡапҡас менән ябып, бер тәүлеккә ҡалдырығыҙ. Төнәтмәне йыуыныу өсөн файҙаланырға.

### Ҡул һәм аяҡ тырнағындағы бәшмәк

❖ Ҡаты итеп ҡәһүә ҡайнатып, уға ҡулдарҙы бер нисә тапҡыр тығып алырға.

❖ 100 грамм 96 процентлы спирт, 2 грамм резорцин, 2 грамм салицил кислотаһы, 5 грамм касторка майынан торған майҙы дарыуханала эшләтеп алығыҙ, ауыртҡан урындарға һөртөгөҙ.

❖ Аяҡтарҙы 1-әр балғалаҡ тоҙ һәм сода һалынған һалҡын һыуға тығып ултырырға һәм йыуырға. Бөтнөктө иҙеп, тоҙ менән болғатырға һәм яҡынса бер сәғәткә аяҡ бармаҡтары араһына һалырға. Дауалау курсын бәшмәк юҡҡа сыҡҡансы дауам итергә.

❖ Таҙа резинаны табала яндырырға һәм көлгә ҡалған резина пудраһын йыйып, ҙур булмаған бинтҡа һөртөргә һәм ауырыу тырнаҡҡа бәйләргә.

❖ Ваннанан йәки мунсанан һуң ауырыу тырнаҡтарға 5 процентлы йод һөртөргә. 3-4 тапҡырҙан һуң бәшмәк юҡҡа сығасаҡ.

### Дерматиттар

Юл япрағы үләнен йыуып, ит турағыс аша үткәрергә. Марля аша һутын һығып алғас, ҡоро таҙа һауытҡа һалып алығыҙ һәм һыуытҡыста һаҡлағыҙ. Ошо һут менән тиренең зарарланған урынын тәүлегенә 2-3 тапҡыр эшкәртегеҙ. Бер аҙнанан хәлегеҙ яҡшырасаҡ. Үлән менән дауаланғанда ваҡыт һәм түҙемлек кәрәк, шуға ла дауаны бер ай тирәһе дауам итергә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

✓ *Юлда һыуһап, ниндәйҙер хәлгә тарып ингән кешеләргә лә яҡты йөҙ менән сәй эсереп ебәрәһең. Уларҙы халыҡ Аллаһ ҡунағы ти. Ашарына булмаһа, аҙыҡ та бирәһең.*



*ӘЙҘӘ, ФЕКЕРЛӘШӘЙЕК!*



# ҠУНАҠСЫЛЛЫҠ, КҮСТӘНӘС - йолабыҙҙың ынйыһы ул

**Гөлсөм Өмөтбаева менән Луиза Ҡаһарманованың иң күркәм йолаларыбыҙҙың береһе - ҡунаҡсыллыҡ тураһында яҙғандарын уҡығас, мин дә уйландым был турала. Һикһән йәшкә етеп барғанда күп төрлө ҡунаҡтар күрелде. Уларҙы мин бер нисә төркөмгә бүләм.**

Иң хөрмәтле ҡунаҡтар - үҙең үткәргән Ҡөрьән уҡытыу, байрам мәжлесенә саҡырылғандары. Бында ҡунаҡсыллыҡтың бөтә нескәлектәрен үтәйһең. Үҙең әҙерләгән ризыҡ менән һыйлау, вәғәздәр тыңлау, хәл белешеү, бүләк, хәйер таратыу атҡарыла. Ҡунаҡтарҙы күстәнәс биреп, ололап оҙатаһың.

Ситтә йәшәгән туғандарың, һабаҡташ дуҫтарың килгәндә лә ихлас ҡунаҡ итәһең. Күршетирәгә ҡунаҡ күрһәтеп, күстәнәстәрен ауыҙ иттерәһең. Был ҡунаҡтар оҙаҡ тормай, уларҙы бер-ике көндән, күстәнәстәр биреп, оҙатып ҡалаһың.

Юлда һыуһап, ниндәйҙер хәлгә тарып ингән кешеләргә лә яҡты йөҙ менән сәй эсереп ебәрәһең. Уларҙы халыҡ Аллаһ ҡунағы ти. Ашарына булмаһа, аҙыҡ та бирәһең.

Бар элмәндәк "ҡунаҡтар". Улар буштан-бушҡа урам ҡыҙыра, эш ҡалдыра. Баҙнатһыҙыраҡ хужабикәләр уларҙан тиҙ ҡотолоу өсөн сәй ҙә эсерә, үҙе эше ҡалғанға уфтана. Ә теге ултыра бирә. Ундайҙарға ихласлыҡ түгел, ә сығыу яғын күрһәтергә кәрәк. Йоланы аңламай ундай кеше.

Тағы ла "бушағыраҡ" ирҙәр булған йортҡа "ҡунаҡҡа" йыш килеүсе ирҙәр бар. Тик уларҙы ҡунаҡ тип түгел, "темеҫкенеп йөрөүсе" тип атайҙар. Хәмер эләкһә - хужа йомарт, эләкмәһә - һаран, тип хәбәр һата ундайҙар. Марат Кәримов әйткәнсә була инде, уның бер шиғырында ла бит берәү кейәүен маҡтай:

*-"Аҡбаш"тарҙы алдарыма*
*Бер-бер артлы ҡуйып торҙо.*
*Кейәү йомарт! Кейәү йомарт!* - ти.

Ә һеңлеһе татлы ризыҡтар менән һыйлаһа ла:

*-Табынының муллығына*
*Ултырҙым мин хайран ҡалып.*
*Ә шулай ҙа "аҡ" ҡуйманы*
*Һеңлем һаран! Һеңлем һаран!* - тип зарлана.

Быйндайҙарҙы һыйлау түгел, һепертке менән һепереп сығарыу хәйерле. Халыҡ йөҙөнә оят ҡына килтерә улар.

Ҡала кешеләре менән ауыл кешеләре бик ныҡ айырыла. Бер йылды күршемә ике балаһы, ҡатыны менән хеҙмәттәше килеп, ун көн ял итеп ятты. Уттай бесән мәле, хужалар өлгөрмәй, ә телеләр төрлөсә мыжып аптырата. Ир ҡунаҡ: "Һеҙҙең бөтә нәмәгеҙ үҙегеҙҙеке, беҙ магазиндар буйлап сабабыҙ", - тип һөйләнә. Ә ит-майҙы еткереү өсөн күпме тир, күпме сығым кәрәклеген уйламай ҙа. Ғаилә ауыҙынан өҙөп, ун көн һыйлаған өсөн рәхмәт тә юҡ, бүләк-күстәнәс тә булманы.

Быуа ошондай ҡунаҡтарҙан һуң халҡыбыҙҙың ҡунаҡсыллығын, күстәнәстәр, бүләктәр биреү йолаһын ваҡламаҫҡа, уны ҡунағына ҡарап үтәргә, самаһын, бизмәнен белергә кәрәк, тип уйлайым. Башҡаларҙа ла төрлө фекерҙәр барҙыр, моғайын, һеҙ ҙә яҙып ебәрһәгеҙ ине.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ*



# НИГЕҘЕ - ШУЛ УҠ ТӘРБИӘ

## Беренсе дәрес: Рәсәй - беҙҙең Ватаныбыҙ

Был предмет буйынса беренсе дәрес бөтөн йүнәлештәрҙә лә бер үк тема менән башлана. "Рәсәй - беҙҙең Ватаныбыҙ" тип атала. Тема матди һәм рухи байлыҡ тураһында төшөнсә бирә. "Тормош һабаҡтары" предметының (И. Бураҡаев, М. Бураҡаева, М. Юлмөхәмәтов) 1995, 2001 йылдарҙа - VII класс, ә 2012 йылда VI класс дәреслектәрендә матди һәм рухи байлыҡ, дин тураһындағы темалар бар. Уҡытыусылар үҙҙәре өсөн байтаҡ мәғлүмәт ала ала. Әле был фекерҙәрҙе ҡабатлап тороу артыҡтыр, тип иҫәпләйем. Ғөмүмән, "Дини мәҙәниәттәр һәм донъяуи этика нигеҙҙәре" предметын алып барған уҡытыусы өҫтәлендә, әйтеп кителде, IV-X класс өсөн "Тормош һабаҡтары" дәреслектәре булһа, дәрескә әҙерлек эше байтаҡҡа еңеләйер.

Билдәле, бөгөнгө заман балалары бик аҙ уҡый, телдәре, бигерәк тә туған теле ярлылана бара. Шуның өсөн был предметҡа бүлеп алынған сәғәтте мөмкин тиклем баланың телен байытыу, фекерләүен тәрәнәйтеү, зиһенен яҡтыртыу өсөн файҙаланырға кәрәк. Теге йәки был билдәләнештәрҙе, аңлатмаларҙы күмәкләшеп ҡабатлау, иҫтә ҡалдырыу, тел шымартыу, үҙ фекерендә иҫбатлап өйрәнеү, өҫтәмә мәғлүмәт туплау өсөн дә файҙаланырға, ҡыҫҡаһы, был дәрестәрҙе үткәргәндә мотлаҡ телебеҙҙе байытыу маҡсатын да күҙҙә тоторға кәрәк. Тел байытыу, башҡорт өндәрен дөрөҫ әйтеп өйрәнеү, күңел сафландырыу һәм йөрәктәргә дәрт өҫтәү һәм, иң мөһиме, рухи һәм физик сәләмәтлек өсөн бергәләшеп йыр йырлауҙан да яҡшыһы юҡ. Буддизмда ла, христианлыҡта ла ғибәҙәт ваҡытында музыка файҙаланалар. Махсус музыкаль әҫәрҙәр ижад ителгән. Дини йолалар менән бәйле музыкаль әҫәрҙәр әле киң билдәле. Исламда махсус музыка юҡ. Әммә башҡорт халҡында ҡобайырҙарҙы, әкиәттәрҙе көйгә һалып һөйләү киң таралған булған. Халҡыбыҙ әйтер фекерҙе моңға сорнап биреүҙең йоғонтоло булыуын яҡшы белгән. Шуның өсөн һәр дәрестә 2-3 минут ваҡыт бүлеп, күмәкләшеп бергә Ватан, туған тел тураһындағы йырҙар, ҡобайырҙар башҡарыу маҡсатҡа ярашлы булыр һәм уҡыусыларҙа дәрескә ҡарата ҡыҙыҡһыныуы бермә-бер артыр.

**(Дауамы. Башы 35-се һанда).**

*АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА*

# ТӘНӘЙҘӘРГӘ ТӘҒӘЙЕН ТӘРБИӘ



## Ун икенсе һабаҡ: "Иң ғәзиз һүҙ - туған өндә"

**Быйыл ейәндәремде башҡорт мәктәбенә алып барғанда ошо мәктәптә уҡытыусы булып эшләгән әсәгә үҙ балаһының "мама" тип өндәшеүен ишеткәс, аптырауымдан шаҡ ҡаттым. Иҫкәртеү эшләгәйнем, ишетмәмешкә һалышты. Уҡытыусы бит балаларҙы иң тәүҙә үҙ булмышы, үҙ өлгөһө менән тәрбиәләргә тейеш. Ә был уҡытыусы минең ейәнемә туған телдең әһәмиәтен аңлата алырмы?**

Башҡорт мәктәбенә уҡырға килгән балаға тәүге дәрестәрҙә үк туған телдә "Әсәй" һүҙен яҙырға өйрәтәләр. Ә был иң изге һүҙҙе үҙ балаһынан ишетмәгән уҡытыусы башҡа балаларға уны ниндәй тойғолар менән өйрәтер икән? "Әсәй" һүҙен туған телендә әйтмәү арҡаһында балаһы менән үҙе араһында күңел пәрҙәһе ҡороласағын ҡасан аңлар?

Туған телдең физик сәләмәтлеккә, рухи сәләмәтлеккә, әсә менән баланың күңел яҡынлығына тәьҫире медицина тарафынан тикшерелмәгән. Уны тикшереп тә булмайҙыр. Ул - тәбиғәттең иң оло серҙәренең береһе. Әммә кешегә аң бирелгән. Ул халыҡ аҡылына, башҡаларҙың яҙмышына, ҡыуанысына-йыуанысына, хәсрәтенә-үкенесенә күҙ һала, һығымта яһай һәм артабанғы йәшәйешендә ошо һабаҡты файҙалана ала. Бала менән Әсәне күҙгә күренмәгән нурҙар бәйләп тора. Ул һиҙеү-тойоу берлеге. Әсә сабыйын тойоп аңлай. Аҙаҡ күҙ тартыу, ирен сәнсеү, түш сәнсеү, ҡолаҡ сеңләү, төш күреү кеүек билдәләр аша бара баланы тойоу. Ошо тойоу һәләте бала ҡарында саҡта уҡ башлана. Бала менән әсәне моң берләштерә. Туған тел моңо. Туған тел моңо һәр ишарабыҙҙа-ымыбыҙҙа, күҙ ҡарашыбыҙҙа, хәрәкәтебеҙҙә сағыла. Туған тел моңо иркәләү һүҙҙәренә, бишек йырҙарына һалына. Туған тел моңо аша әсә менән баланың күңел берлеге нығына бара. Тел моңо - беҙҙең өндәребеҙгә һалынған.

**Үҙегеҙ тәжрибә үткәрегеҙ һәм күҙәтегеҙ:**

**Беренсе эш:** ҡулығыҙға алған сабыйығыҙға иркәләү һүҙҙәрен туған телдә һәм ят телдә өндәшеп ҡарағыҙ. Туған моң йәки ят моң менән йоҡлатып ҡарағыҙ.

**Икенсе эш.** Йорт-ерен, атаһы менән әсәһен ташлап сит-ят яҡтарға йәшәргә сығып киткән, йәки улар тураһында фәҡәт бурыс итеп тойоп ҡына хәстәрләгән, бөтөнләй күңел яҡынлығы булмаған әсә менән бала үҙара ниндәй телдә аралашты икән? Туған телдә булған осраҡта ла әсәһе менән атаһына ниндәй телдә өндәште икән? Мәҫәлән, бәләгә ҡалған үҫмерҙәр минән кәңәш һорап килә икән, минең беренсе һорауым: "Был хаҡта әсәйең беләме?" "Ул мине аңламай", тип яуап ҡайтара бала. Икенсе һорауым: "Әсәйеңә кем тип өндәшәһең?" "Ят телдә". Тимәк, әсә менән бала күңеле араһында иң тәүге ауаздан, иң тәүге өндән башлап күңел пәрҙәһе ҡорола башлаған.

"Ниндәй телдә булһа ла, бәләкәйҙән өйрәнгәс, барыбер түгелме ни?" тигән һорау тыуыуы ихтимал. Тәбиғәт бит бала менән күңел берлеген өндәргә һалған. Һүҙҙәр аҙаҡ бар булған. Аҙаҡ бар булһа ла, ниндәй генә тел булмаһын, ул туған тел моңона - туған өндәргә нигеҙләнгән. Тәбиғәттәге бөтөн йән эйәләре лә өн-тауыштар аша аралаша. Күҙәтегеҙ әле: аҙашып ҡалған сабый йән эйәһе - бәрәсме, себешме, бәпкәме, ҡолонмо, быҙаумы, бесәй балаһымы - үҙенсә өн сығара ла бер аҙға тынып ҡала. Үҙе лә инәһенең яуабын көтөп тыңлана. Тағы өн сығара. Тағы тына. Шул саҡ инәһе әллә күпме тауыштар араһынан үҙ балаһының өнөн танып килеп етә. Тәбиғәт күңел берлеген өн моңона сорнап һала. Кешеләр ҙә бит - тәбиғәт балаһы.

Ҡыҫҡаһы, әйтә торған фекеремдең төп әрәсәһе - балаларығыҙ менән туған өндәргә нигеҙләнгән туған телебеҙ аша аралашығыҙ, күңел пәрҙәһен юҡҡа сығармағыҙ. Балағыҙ иң ауыр мәлдәрҙә ошо мондо һағынып, күңеле тартылып торған әсәһенә ҡайтһын, күңел нуры өҙөлмәһен. Шул саҡта тәрбиәлә бик күп ҡаршылыҡтар еңелерәк хәл ителер. Балағыҙҙан яҙғас, ҡайҙан аҡланыу табырға белмәй аптыранып, төрлө сәбәптәрҙе һылтанып маташмаҫһығыҙ. Туған тел - ул бөйөк тәрбиәсе. Туған өнгә, туған моңға һалынған иң ғәзиз һүҙҙәр аша күңел берлеге нығына бара. Ә ят тел - ят өндәр йыйылмаһы. Тәбиғәттәге башҡа йән эйәләренән өлгө алайыҡсы, әсәйҙәр, балаларыбыҙға-ейәндәребеҙгә белем генә түгел, тәрбиә биреүсе уҡытыусылар.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

*✓ Уларға учалылар ҙа ҡушылып, мәғлүмәт стендтарындағы ауылдарҙың барлыҡҡа килеү датаһын ревизия сказкалары буйынса түгел, ә ауыл зыяраттарында табылған эпитафияларға нигеҙләнеп алмаштырҙы.*

*ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!*

**Йәш башҡорт граффитиология фәненең эҙләнеүҙәре, өйрәнеүе һөҙөмтәһендә башҡорт халҡының яҙма тел тарихы өлкәһе арыу ғына уңыштарға өлгәште. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, киң мәғлүмәт саралары һаманғаса, революцияға тиклем халҡыбыҙҙың үҙ яҙмаһы булмаған һәм ауылдар бары тик Рәсәй дәүләте составына ингәндән һуң ғына барлыҡҡа килгән, тип, уларҙың йәшен 250-300 йыл менән сикләүҙе дауам итә. Был йәһәттән бары тик баймаҡтарҙың төбәк тарихы буйынса яңы яҙма сығанаҡтар табылғандан һуң үҙ ҡамустарын ҡабаттан нәшер итергә ҡарар ҡылыуы ғына күңелде бер аҙ йылыта. Уларға учалылар ҙа ҡушылып, мәғлүмәт стендтарындағы ауылдарҙың барлыҡҡа килеү датаһын ревизия сказкалары буйынса түгел, ә ауыл зыяраттарында табылған эпитафияларға (ҡәбер таштарындағы яҙыуҙар) нигеҙләнеп алмаштырҙы.**
**Ысынлап та, башҡорттар бына инде 7 мең йыл үҙенең яҙма, ысын тарихын бәйән итә, әммә һуңғы 500 йылда уға башҡалар яҙған тарихты көсләп тағалар. Юҡ, һеҙ яңылыш ишетмәнегеҙ, беҙҙең яҙма, ысын тарихҡа тап 7 мең йыл. Әйҙәгеҙ, ошо темаға ентекләберәк туҡталайыҡ.**

# БАШҠОРТ ЯҘМАҺЫ...

## ете мең йыллыҡ тарихҡа эйә

Беҙ Бөрө районының Яңы Күлсебай ауылы эргәһендәге Тамғаташ ҡаяһында - иероглиф яҙма һәйкәлдәр, Ейәнсура районының Үтәғол ауылында - еҙ ҡоршау, Нуриман районындағы Бахмутин ҡәберлегенән табылған мисәт барлығын беләбеҙ. Шулай уҡ республикала гетерограмма (иероглифтарҙың үҫешен тәьмин иткән тамғалы яҙмалар) һәйкәлдәре лә бар. Мәҫәлән, Иглин районының Охлебинино ҡаласығында табылған һөйәк ҡәләм тотҡаһындағы, Ейәнсура районы Үрген ауылы эргәһендәге Ҡорбанташ ҡаяһындағы, Арҡайымда табылған көршәктәге яҙыуҙар гетерограммаға ҡарай. Барлыҡ был яҙма ҡомартҡыларҙың етешһеҙлеге - уларҙы яҙыу датаһы билдәләнмәгән. Хәҙер был етешһеҙлек бөтөрөлдө. Археологтар тарафынан Елабуға эпитафияһы (Яңы Мордва ҡәберлегенән) табылып, нәшер ителде һәм боронғо башҡорт (протобашҡорт) телендә "һөйләшеп", үҙенең яҙылыу датаһын донъя яралғандан 162-се йыл менән билдәләне. Эпитафия былай тип уҡыла: "Блт Кнг. 162", йәғни хәҙерге башҡорт телендә "Ләтһеҙ Ҡанг. 162-нсе йыл" тигәнде аңлата. Рус телендә инде "Не имеющий идолов для поклонения Канг. 162-ой год с сотворения мира" тигәнде аңлата (**Һүрәтте ҡарағыҙ**).



Иероглифтар һәм гетерограммалар ваҡыт үткәс руна яҙмалары менән алмашына. Яҙманың руна системаһы башҡорттар тарафынан Ғайса бәйғәмбәрҙең 600-сө миләди йылынан алып, миләди йыл һуңынан 1500 йылға тиклем дауам итә. Быңдай яҙма ҡомартҡыларға Үрген ҡабырсағы һәм Үрген стереотибы, Буранғол һәм Үтәғол эпитафиялары, Ейәнсура районының Абҙан ауылы эргәһендәге Сусаҡтау ҡаяларындағы яҙыуҙар, Күгәрсен районының Санъяп таш грамотаһы, Санъяп һәм Юлдыбай эпитафиялары, Баймаҡ районының Буранбай ауылының географик күрһәткесе, Беренсе Этҡол һәм Байым ауылдары эпитафиялары, Хәйбулла районының Ғәбделнасир ауылы эпитафияһы, Ҡариҙел районының Яҡуп эпитафияһы, Өфө ҡалаһында табылған һөйәк ҡулсаларындағы яҙыуҙар, Саҡмағош районындағы Ҡалмаш плитаһындағы һәм Әлшәй районының Киленташтағы яҙыуҙар, Күгәрсен күҙ ҡәберлегенең эпитафияһы, Учалы районының Мәҫкәү, Ҡолош, Науруҙ ауылдары эпитафиялары, шул уҡ райондың Баттал, Ҡотой, Ҡолош, Оҙонкүл ауылдарының географик күрһәткестәре инә. Бынан тыш, руна яҙмалары Башҡортостандың тирә-яғында ла: Биләр ҡаласығында, Пермь крайында, Удмурт, Татарстан республикаларында, Нижегородка губернаһында, Ырымбур өлкәһендә табылды.

Башҡортостандан көнбайышҡа яҙмаларҙың был төрө йыш ҡына Дон һәм Донец, Днестр һәм Днепр йылғалары һыуы баҫҡан туғайҙарҙа, Дунайҙың урта ағышының һул ярында һәм Дунай тамағында осрай. Башҡортостандан көнсығышҡа табан руна яҙмаларын Иртыш үҙәндәрендә, Урта Азияла, Алтайҙа, Яҡутстанда, Көнсығыш Төркөстанда (Ҡытай) һәм Тибетта табырға мөмкин. Башҡорт руна яҙмаһының өлгөһө һүрәттә бирелгән.



Яҙмабыҙҙың төп төрө булып руна XV быуат һуңына тиклем хеҙмәт итә. Әммә Ғайса бәйғәмбәрҙең миләди йылының тәүге йылынан башлап башҡа яҙмалар барлыҡҡа килә һәм улар беҙгә яңы донъяуи диндәр менән бергә үтеп инә.

Баймаҡ районының Темәс ауылы ҡурғандарында пехлеви хаты тип яҙылған табличка табыла. Был документ Ғайса бәйғәмбәрҙең миләдиенән һуң быуат башына тура килә һәм зароостризм дине мираҫы булып тора.

Архангел районының Ҡыҙғы ауылында брахма хаты эпитафияһы, Ейәнсура районының Сәғит ауылында сүриә-арамейск яҙмаһындағы эпитафия, Ейәнсура районының Үрген ауылында көмөш ҡулсалы манихей хаттары табыла. Бынан тыш, бик күп башҡорт сулпылары һәм көмбәҙҙәре (милли кейем предметы) был яҙма төрө менән һырланған. Ә инде сулпылар һәм көмбәҙҙәр республиканың һәр башҡорт ауылында бар. Яҙмаларҙың был өс төрө лә ата-бабаларыбыҙ 350 - 1257 йылдарҙа тотҡан ике донъяуи диндең мираҫы. Был диндәрҙе "манихеизм" һәм "несторинство" тип атайҙар.

Башҡортостанда хазар-ҡараит яҙмаһы һәйкәлдәре лә табылды. Уларға Ҡариҙел районының Яҡуп ауылы, Учалы районынан Күгәрсен күҙ ҡәберлеге, Йылайыр районының Юлдыбай ауылы эпитафияларын индерергә мөмкин. Республиканан ситтә быңдай эпитафиялар Ырымбур өлкәһенең Иҫәнгилде һәм Әхмәр ауылдарында булыуы мәғлүм. Бынан тыш, хазар-ҡараит хаты Хазар ҡағанатының һәм Ҡыпсаҡ мәликәтенең барлыҡ уҡытыусылыҡ билдәләрендә (көмбәҙ төрҙәре) лә ҡулланылған һәм улар республиканың барлыҡ ауылдарында ла осрай. Хаттың был тибын иудей динен тотҡан барлыҡ башҡорттар ҡулланған.

Буддизм диненең мираҫы тип нагари, ҡалмыҡ, монгол яҙмаларын атарға була. Улар эпитафияларҙа һәм бронза әйберҙәрҙә әлегә берәр данала ғына табылған. 689 йылдан башлап - ирекле, ә 737 йылда ғәрәптәр менән Саклава (хәҙерге атамаһы - Минзәлә) йылғаһы эргәһендәге һуғышта еңелгәндән һуң мәжбүри рәүештә башҡорт ҡәбиләләренең бер өлөшө ислам диненә күсә башлай. Тап шул ваҡытта Башҡортостанда ғәрәп яҙмаһының төрлө төрөндә башҡарылған башҡорт документтары барлыҡҡа килә. Шуны ла билдәләп китергә кәрәк: руна һәм хазар-ҡараит яҙмалы эпитафиялар шул ваҡытта йылды һижрә буйынса иҫәпләй башлай. Шуға күрә ғәрәп яҙмаһының традицион булған яҙманы шунда уҡ алмаштырмағанын билдәләргә кәрәк. Атай-олатайҙарыбыҙҙың ғәрәп яҙмаһындағы мираҫы ҙур булғас, мин 689 һәм 1257 йылдар араһында әҙерләнгән һәйкәлдәрҙе генә картаға төшөрөргә ҡарар иттем.

Башҡорттарҙа традицион булмаған яҙмаларҙан уйғыр һәм согде (уларҙы боронғо авторҙар көнбайыш һунн һәм көнсығыш һунн яҙма билдәләр тип атаған) һәйкәлдәрен билдәләргә мөмкин. Улар: Башҡорт дәүләт университетының музейында һаҡланған Асен шада миҙалы, Ейәнсура районының Өмбәт ауылынан Ҡараханидтар дәүләте миҙалы, Учалы районының Ҡотой ауылындағы эпитафия, Ейәнсура районының Үрген ауылы эргәһендәге Үрген йылғаһы һәм Муйыллы йылғаһы эргәһендәге йылға тамағындағы кисеү күрһәткестәре, Ейәнсура районының Юнай ауылы зыяратындағы сикте билдәләүсе бағана. Һүрәттә Ейәнсура районы музейындағы ҡоршау күрһәтелгән.



**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Күреүегеҙсә, учалылар һәм баймаҡтар атай-олатайҙарыбыҙҙың яҙма мираҫына, яҙма тарихына ихтирам һәм ышаныс белдереп, дөрөҫ ҡарар ҡабул иткән. Ошо ике районДың башланғысын башҡа районДар халҡы ла күтәреп алыр, тип уйлайым.**

**Иршат ЙӘНБИРҘИН.**
**Ейәнсура районы**
**Иҫәнғол ауылы.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# 1812 ЙЫЛҒЫ ВАТАН ҺУҒЫШЫНЫҢ...

## орден кавалерҙары

**Буранғол Ҡыуатов** (1750 - 1833) - кантон начальнигы. Майор (1817). 1805- 1807 йылдарҙа рус-австро-француз һуғышында, 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Ҡыуатовтарҙың дворян тоҡомонан. 1799-1817 йылдарҙа Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең 9-сы башҡорт кантоны етәксеһе. 1-се башҡорт полкы командиры булып хеҙмәт итә. 1817 йылда Буранғол Ҡыуатов үҙ ырыуы составында Ырымбур губернаһының Дворяндар шәжәрәһе китабына индерелгән. Өсөнсө дәрәжә Изге Анна ордены, "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған. Буранғол Ҡыуатов исеме менән хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районындағы Буранғол ауылы аталған.

**Ғөбәйҙулла Атанғолов** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Зауряд-есаул. Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙе Ҡыпсаҡ олоҫонон (хәҙерге Ейәнсура районы) Назар ауылынан. Беренсе Башҡорт полкы составында Рәсәй империяһы, Пруссия, Саксония, Голландия, Франция һ.б. территорияларҙағы хәрби операцияларҙа ҡатнаша. Изге Георгий Хәрби орденының отличие билдәһенә лайыҡ була. "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

**Буранбай Сыуашбаев** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Зауряд-есаул. Ырымбур губернаһы Бузулук өйәҙе Бөрйән олоҫонон (хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Переволоцк районы) Ҡотләмбәт ауылынан. 1812 йылда 1-се башҡорт полкы составында Мир эргәһендә, Гродно, Смоленск ҡалаһы, Романово, Бородино, Можайск, Малоярославец ҡалалары өсөн алыштарҙа, 1813 йылда Данциг блокадаһында, Берлинды азат итеүҙә, Лейпциг һуғышында, Дрезден алышында, генерал-майор А.Х. Бенкендорфтың Голландияға рейдында, 1814 йылда Парижды алыуҙа ҡатнаша. Бигерәк тә "...Гродно ҡалаһы эргәһендә... айырыуса айырылып тороуы, ҡаһарманлығы өсөн, урядник булыуына ҡарамаҫтан, 30918 номерлы Георгий тәреһе хәрби ордены менән наградлана, Ютербок эргәһендә - 15-16 августағы, Винтенбург ҡалаһы эргәһендә - 21-22 августағы ҡаһарманлығы һәм айырылып тороуы өсөн юғары чинға тәҡдим ителә, 1813 йылдың 6 декабрендә йөҙ башы (сотник) чинына һәм яҡшы хеҙмәте өсөн император ғали йәнәптәренең рәхмәтенә лайыҡ була..." Изге Георгий Хәрби орденының отличие билдәһе, "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

**Ирназар Дәүләтсурин** - 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит илдәргә походында ҡатнаша. Ырымбур губернаһы Бошман-Ҡыпсаҡ олоҫо Томансы ауылынан (хәҙерге Мәләүез районы). 1-се башҡорт полкы составында Рәсәй империяһы, Саксония, Пруссия, Голландия һәм Франция территорияларындағы хәрби операцияларҙа ҡатнаша. 1813 йылда Изге Георгий Хәрби орденының отличие билдәһенә лайыҡ була. "1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлеге", "1814 йылдың 19 мартында Парижды алған өсөн" миҙалдары менән наградланған.

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**
**(Дауамы бар).**

***✓ Үҙ телен белмәгән кешенең башҡа сит телдәрҙе үҙләштереүҙә лә уңыштары юғары булмай. Шулай уҡ сит тарафтарҙа тыуған телен белгән кешегә барыһы ла хөрмәт менән ҡарай.***

**Рәсәй йәмғиәте оло үҙгәрештәр кисерә. Был үҙгәрештәр араһында йәштәрҙе дөрөҫ тәрбиәләү һәм төплө белем биреү мәсьәләләре мөһим урындарҙы алып тора, сөнки нәҡ бөгөнгө йәштәр яҡын киләсәктә ил яҙмышын хәл итәсәк, яңы мәҙәни традицияларға юл асасаҡ, йәшәү рәүешен яңыса төҙөйәсәк, кешеләрҙең үҙ-ара бәйләнешен көйләйәсәк. Быларҙың барыһын да һөҙөмтәле итеп тормошҡа ашырыу өсөн, тәү сиратта, йәмғиәттең белемле булыуы мотлаҡ. Заман талаптарына яуап биреүсе белем тауына үрләүсе йәштәребеҙ рәтендә Владивосток ҡалаһының Алыҫ Көнсығыш Федераль университетында белем алыусы Учалы районы егете Илһам ҒӘЛЛӘМОВ һәм Әлшәйҙән Илгиз САФИН да бар. Бөгөнгө һөйләшеүебеҙ белем өлкәһен байҡау менән бер рәттән, башҡа темаларҙы ла үҙ эсенә алды.**

**▸ Быға тиклем йәштәребеҙ Мәскәү, Санкт-Петербургтың юғары уҡыу йорттарынан ары китмәй ине, ә һеҙ, егеттәр, Алыҫ Көнсығышҡа уҡ сығып киткәнһегеҙ, һеҙҙе унда ниндәй елдәр ташланы?**

**Илгиз:** 2009 йылда Башҡортостан Хөкүмәте төрлө йүнәлештә белгестәр әҙерләү маҡсатында республика райондары һәм ҡалаларынан мәктәп тамамлаған егет һәм ҡыҙҙарҙы Рәсәйҙең төрлө ҡалаларына уҡырға ебәрҙе. Миңә лә ошо исемлеккә эләгеү бәхете тейҙе һәм бөгөнгө көндә Владивосток ҡалаһындағы ошо университеттың 3 курсын тамамланым. Буласаҡ һөнәрем - ҡытай һәм инглиз телдәре тәржемәсеһе.

**Илһам:** Мин дә ошо уҡ университетта корея һәм инглиз телдәрен өйрәнәм. Владивостокка киткәнгә тиклем Өфөнөң юғары уҡыу йорттарының береһендә уҡыным. Ләкин беренсе курста уҡығанда уҡ буласаҡ һөнәремдең артабанғы тормошомда кәрәкһеҙ буласағын аңланым. Шуға күрә башҡа уҡыу йортонда, башҡа йүнәлештә уҡыу мөмкинлеге килеп тыуғас, уны ҡулдан ысҡындырманым һәм был аҙымыма бер ҙә үкенмәйем.

**▸ Күрмәгән-белмәгән яҡтарға, етмәһә, тыуған яҡтарҙан бик алыҫ ергә сығып китергә нисек йөръәт иттегеҙ һәм ни өсөн нәҡ ошо һөнәрҙәргә өҫтөнлөк бирҙегеҙ?**

**Илһам:** Башҡортостан Хөкүмәте үҙ ваҡытында республика йәштәрен башҡа төбәктәргә уҡырға ебәреп, бары тик белем кимәлен арттырыуҙы ғына күҙ уңында тотмағандыр, тип уйлайым. Тыуған йортонан, өйрәнгән мөхитенән бер аҙ ситтә йәшәүселәр донъяға бөтөнләй икенсе күҙлектән сығып ҡарай башлай. Сит яҡтарҙа уҡыу, минеңсә, тәү сиратта, кешегә белем биреү йәһәтенән дә түгел, ә уның аңын үҫтереү, донъяға ҡарашын формалаштырыу, ваҡиғаларға төрлө юҫыҡтан сығып ҡарарға өйрәнеү йәһәтенән файҙалы. Икенсе ҡалаға белем алырға киткән кеше ысынлап та үҙгәрә, ысынлап та йәмғиәткә файҙалы һөнәр эйәһенә әүерелә. Һөнәрҙе уны республикала уҡып та алып була. Ә бына үҙенде йәмғиәткә файҙалы кеше итеп тойоу булмаҫҡа мөмкин. Шуға күрә мин таныш булмаған ергә, бөтөнләй икенсе мөхиткә уҡырға барыуҙы ҡулай күрҙем.

**Илгиз:** Университетта үҙләштергән һөнәребеҙ беҙгә төрлө өлкәлә эшләргә мөмкинлек бирәсәк, сөнки бөгөнгө көндә сит телдәр белгесе ҙур һорау менән файҙалана. Ә киләсәктә был ихтыяж тағы ла артасаҡ, тип иҫәпләйем, сөнки йылдан-әйыл Рәсәйҙә, шул иҫәптән Башҡортостанда ла, сит илдән килеүсе инвесторҙар һаны арта. Тимәк, сит телдәр белгестәренә лә һорау күбәйәсәк.

**Илһам:** Башҡорт егеттәре һәм ҡыҙҙарының Азия телдәрен өйрәнеүенә тағы ла бер сәбәп бар. Ҡытай һәм Япониының дәүләт архивтарында башҡорт халҡы тураһында мәғлүмәт күп. Әлегә тиклем улар үҙҙәренең өйрәнеүсеһен көтә. Бөгөнгө көндә был юҫыҡта бары тик татар ғалимдары ғына эш алып бара. Беҙгә лә үҙ тарихыбыҙға битараф булмаҫҡа һәм архивтарҙағы мәғлүмәттәрҙе өйрәнә башларға ваҡыт. Шуға күрә әлеге ваҡытта телдәрҙе үҙләштереүебеҙ шәхсән үҙебеҙгә генә түгел, ә халҡыбыҙҙың әлегәсә яҡтыртылмаған тарихын өйрәнеүҙә лә кәрәк булыр, тип ышанабыҙ. Был өлкәлә эш алып барған, эш алып барырға теләгән ғалимдарыбыҙға ла эскерһеҙ ярҙамыбыҙҙан баш тартмайбыҙ.

**Илгиз:** Беҙ уҡыған уҡыу йортонда Рәсәйҙең барлыҡ төбәктәренән һәм шулай уҡ сит илдәрҙән дә күпләп белем алалар. Ҡытай һәм корея телен өйрәнеүсе булараҡ, беҙҙең менән бергә ошо ил вәкилдәре күп уҡыуы ла файҙалы, сөнки улар менән аралашыу беҙгә белә. Шуға күрә беҙгә был телдәрҙе өйрәнеү әллә ни ауыр түгел.

**▸ Тыуған телеңде юғары кимәлдә белеү генә сит телдәрҙе лә ошо уҡ дәрәжәлә өйрәнеү мөмкинлеге бирәсәк, тигән бөйөк урыҫ яҙыусыһы Федор Достоевский. Ризаһығыҙмы?**

**Илгиз:** Әлбиттә. Үҙ телен белмәгән кешенең башҡа сит телдәрҙе үҙләштереүҙә лә уңыштары юғары булмай. Шулай уҡ сит тарафтарҙа тыуған телен белгән кешегә барыһы ла хөрмәт менән ҡарай. Әйтергә кәрәк, 90-сы йылдарҙа беҙҙең ил мәҙәни революция кисерҙе. Кеше тирә-яҡҡа, донъяға бөтөнләй икенсе күҙлектән сығып ҡарай башланы. Шул иҫәптән тыуған телгә лә ихтирам һәм иғтибар артты. Элегерәк урамда тыуған телендә һөйләшергә ҡыймаған оло быуын хәҙер килеп рәхәтләнеп үҙ телендә аралаша. Ләкин уларҙың күңелендә әле булһа телгә булған ситләтеп ҡарауҙан тыуған тойғолар, ҡурҡыу, уңайһыҙланыу эҙҙәре юйылып бөтмәгән. Шуға күрә улар балаларға тыуған телде белеүҙең әһәмиәтен һәм кәрәклеген аңлатып еткерә алмай, минеңсә. Мәҫәлән, мәктәп йылдарында нәҡ ошо проблема менән осрашырға тура килде, йәғни ни өсөн тыуған телде белеү мөһим икәнлеген минең бала күңеләмә еткерә алманылар. Ләкин сит тарафтарға сығып китеү мине үҙ асылыма ҡайтарҙы, тыуған телемдең гүзәллеген аңларға ярҙам итте.

Атай-әсәйҙәр һәм уҡытыусылар үҙ борсолоуҙары менән бала күңеленә шом һала, уларҙа үҙҙәренә булған ышанысты кәметә. Күптәр БДИ-ға эләкмәҫ өсөн генә, теләмәһә лә, 9 кластан һуң колледж һәм техникумдарға уҡырға китә. Ләкин был ҡурҡыу урынһыҙ, тип әйтер инем, сөнки ундағы мәсьәләләрҙең барыһы ла мәктәп программаһынан алына һәм тырышҡанда барыһын да атҡарып сығырға була.

**Илгиз:** Дөрөҫөн әйткәндә, Рәсәйҙең төпкөл ҡала һәм ауылдарында белем алыусы балаларға БДИ тормош тарафынан бирелгән оло мөмкинлек ул. Бары тик уны дөрөҫ ҡуллана белергә генә кәрәк. Уйлап ҡарағыҙ, мәктәпте тамамлаусылар араһынан нисә уҡыусы ҙур ҡалаларға барып имтихан биреп йөрөй ала? Бик әҙҙәр өлөшөнә генә төшкән бәхет булыр ине был. Ә БДИ - өйөндән сыҡмай ғына Башҡортостан, тотош Рәсәй уҡыу йорттарына документ тапшырыу һәм уҡырға инеү мөмкинлеге бирә. Элек, мәҫәлән, ауыл мәктәбе уҡыусыларының иң ҙур хыялы яҡындағы ҡаланың ниндәй ҙә булһа уҡыу йортона уҡырға инеү булһа, бөгөнгө көндә был масштаб киңәйә, ҙурая. Ләкин, ҡыҙғанысҡа күрә, ошо мөмкинлек менән файҙаланып ҡалыусылар әле булһа әҙ.

# АЗИЯҒА ЛА ИҒТИБАР

## йәғни Йәштәрҙең ҡытай,



**Илһам:** Беҙҙең ил электән Европаға "күҙ һалып" йәшәй. Йәғни беҙҙе күберәген нәҡ Европала нимә барғанлығы ҡыҙыҡһындыра, уларҙан ҡалышмаҫҡа тырышып көн итәлә. Ләкин Азияла ла бөтә донъяны хайран итер асыштар булып тора, иҡтисади йәһәттән дә ул алдынғылар рәтендә үҙ урынын алған. Азияла ғилми һәм мәҙәни потенциал да Европанан бер ҙә кәм түгел. Ғөмүмән, иғтибарҙы Азияға йүнәлтеү өсөн барлыҡ сәбәптәр ҙә бар. Ә ҡайҙалыр "үҙ кеше" булып китеү өсөн, тәү сиратта, телде белеү мөһим. Шуға күрә үҙләштергән һөнәребеҙҙең тормошта кәрәге тейеренә шигебеҙ юҡ.

***Ҡытай йәштәре, беҙҙән айырмалы рәүештә, киләсәкте бер-ике йыл менән генә түгел, ә унар йыллап алға күҙаллай. Беҙҙекеләр диплом алыу хаҡында ғына уйлаһа, улар үҙҙәренең алдағы ун йыллыҡ тормошон теүәлләп ҡуя. Тағы ла бер айырма хаҡында әйтеп үтеү мөһимдер, тип уйлайым. Беҙҙең егеттәр киләсәген ҡатыны, балалары һәм уларҙың йәшәйеше менән генә бәйләһә, ҡытай егеттәре өсөн ғаилә - ул, ҡатыны һәм балаларынан тыш, атай-әсәһе, олатай һәм өләсәһе, шулай уҡ ҡатынының да туғандары. Тимәк, улар баштан уҡ үҙ елкәләренә ошондай оло яуаплылыҡ ала, ә беҙҙә ҡайһы бер егеттәр хатта үҙ яҙмышы өсөн дә яуаплылыҡ ала  алмай.***

**Илгиз:** Башҡортостан - уникаль төбәк. Һәм был төбәктә тыуғандарҙың барыһына ла ҙур мөмкинлектәр бирелгән. Мәҫәлән, республика Азияны ла, Европаны ла үҙ эсенә алғанлыҡтан, беҙҙә ике ҡитғаның да тәьҫире көслө. Беҙҙең халыҡ европалыларҙы ла, азиялыларҙы ла яҡшы аңлай, уларҙың менталитетын һәйбәт

**▸ Ул мөмкинлек менән, бәлки, йәштәр файҙаланыр ине лә, тик балаһын үҙҙәре янынан ситкә ебәреүгә, тәү сиратта, атай-әсәйҙәр әҙер түгел...**

**Илһам:** Ысынлап, ҡайһы саҡта бындай мөмкинлекте тормошҡа ашырыуҙа атай-әсәй кәртә булып тора. Улар балаларын яндарынан ебәреүҙән ҡурҡа. Тик кеше һәр ваҡыт атай йортонда йәшәй алмай, уға үҙаллы осоу мөмкинлеге бирергә кәрәк. Әлбиттә, бындай осош ваҡытында хаталар ҙа, үкенеүҙәр ҙә булыр, ләкин ошо рәүешле генә кеше донъяла йәшәргә өйрәнә һәм йәмғиәттә үҙ урынын таба. Был хәҡиҡәтте башҡа милләттәр яҡшы аңлай һәм тормошта ҡуллана, тик беҙҙең халыҡ аҡрыныраҡ яраҡлаша үҙенә уңайһыҙ тойолған ошондай заман талаптарына.

Әлбиттә, белем алам, тип, атай-әсәйҙең ризалығын алмайынса юлға сығыу ҙа ярамай. Ҡайҙалыр сит тарафтарға уҡырға барырға бик ныҡ теләгәндә лә уларҙың фатихаһынан башҡа эш итергә ярамай. Ҡоро үсегеү, илау, ныҡышмалыҡ менән генә атай-әсәйҙең ризалығына өлгәшеү ҙә дөрөҫ булмаҫ ине, шуға күрә был сәфәрҙән нимә көтөүегеҙҙе,

**▸ Ҡайҙалыр уҡырға инеү өсөн тәү сиратта Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырыу шарт. Ләкин БДИ тирәләй йыл да ҡупҡан хәүефле шаушыу уны күптәр өсөн оло һынауға әйләндерә. Ысынлап та, уны ошо юҫыҡта ҡарау дөрөҫмө?**

**Илһам:** Эйе, был имтихан тирәләй барған ваҡиғалар хайран ҡалырлыҡ. Барыһын да ҡурҡыу тойғоһо баҫып алған.

***✓ Ике яҡ та һәйбәт заманалар килеүен көтөп ята бирә. Тора-бара атай-әсәй инде утыҙҙы, ҡырҡты уҙған балаһын ҡарауҙан ялҡа, ә "бала" өйрәнгән, барыһы ла әҙер булған көнитмешенән айырылырға теләмәй.***

# ЙҮНӘЛТӘЙЕК, корея, япон телен өйрәнгәне



унда белем алыуығыҙ киләсәктә ниндәй һөҙөмтәләр бирәсәген һәм ни өсөн нәҡ шул ҡалаға һәм нәҡ шул уҡыу йортона уҡырға барырға теләүегеҙҙе аныҡ миҫалдар менән дәлилләү мөһим. Ә бының өсөн, тәү сиратта, маҡсатыңды үҙең асыҡ итеп күҙ алдына баҫтырырға тейешһең. Кемдеңдер саҡырыуы буйынса, ныҡлап уйламай ғына ҡарар ҡылырға ярамай. Был төптән уйланылған аҙым булырға тейеш. Уҡырға барғас нимә эшләйәсәгеңде, белем алыу барышында ниндәй маҡсаттарға өлгәшергә тырышасағыңды һәм хатта ҡулыңа диплом алып, эшкә урынлашҡас, ниндәй эшсе буласағыңды ла уйларға һәм кәрәкле һығымталар яһағас ҡына ҡайҙалыр юл тоторға мөмкин.

**▸ Беҙҙең халыҡҡа хас тағы ла ниндәй сифаттар бөгөнгө көндә кире роль уйнай, уңыштар яуларға, маҡсатҡа өлгәшергә ҡамасаулай, тип билдәләр инегеҙ?**

**Илгиз:** Беҙҙең күңелдәрҙә ҡурҡыу тойғоһо йәшәй әле һаман. Быуаттар буйы формалашып килгән ҡурҡыу беҙгә үҙ тормошобоҙҙа нимәнелер үҙгәртеүгә, кәрәк саҡта тейешле һүҙ әйтергә, кемделер яҡлап сығырға һәм башҡа күп осраҡтарҙа кәртә булып тора. Беҙ - консерватив ҡарашлы халыҡ. Үҙ тормошобоҙҙо үҙебеҙҙең ҡулға алыуҙан ҡурҡабыҙ. "Беҙ һеҙгә теймәйбеҙ, һеҙ ҙә беҙҙе борсомағыҙ", тигән принциптан сығып көн итәбеҙ. Оҙаҡ уйлайбыҙ, икеләнәбеҙ. Әлегә аҙағынаса уйланып бөтөлмәгән эш, ҡарар хаҡында ла ваҡытынан алда һөрән һалабыҙ. Бик ышаныусанбыҙ, уйыбыҙҙа нимә бар, барыһын да тирә-яҡтағыларға һөйләп барабыҙ.

**Илһам:** Һаман да кемдәндер нимәлер көтөп йәшәйбеҙ. Ләкин заманаһы ундай түгел. Барыһын да тик үҙеңә башҡарырға, үҙеңә йүгерергә һәм үҙеңә ышанырға кәрәк. Бар донъя быны күптән аңлаған, бары тик беҙ генә әле булһа ошо күктән төшкәнде көтөп йәшәүҙән арына алмайбыҙ.

**Илгиз:** Халҡыбыҙҙың быуаттар дауамында формалашҡан һәм һаҡланып килгән традиция һәм йолаларын инҡар итергә ярамай, ләкин уларға бөгөнгө көн күҙлегенән сығып ҡарау мөһим. Беҙ бөйөк һәм боронғо тарихлы халыҡ, үткәнебеҙ өсөн ғорурланабыҙ, үҙ бәҫебеҙҙе һәм абруйыбыҙҙы төшөрмәй йәшәргә тырышабыҙ, киләсәктә лә шулай буласағына иманым камил. Тик ҡайһы саҡта беҙ үткән быуаттарҙа тороп ҡалғанбыҙ һымаҡ тойолоп китә. Заманға эйәрергә ашыҡмайбыҙ, башҡалар заманға эйәреп алға уҡ китте, беҙҙе артҡа ҡалдырып китте. Шулай уҡ үҙебеҙҙе башҡалар алдында күрһәтә белмәйбеҙ. Мәҫәлән, Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә, сит ҡалаларҙа төрлө һабантуй һәм башҡа ҙур байрамдар уҙа. Ошо сараларҙа Башҡортостан үҙен нисек күрһәтә? Йылдар дауамында, байрамдан байрамға бер төрлө: тирмә ҡуябыҙ, унда башҡорт аш-һыуынан табын ҡорабыҙ, йыр-бейеү күрһәтәбеҙ. Был һәйбәт һәм был йәһәттән беҙҙең милләткә еткәндәр юҡ. Ләкин хәҙер бының менән генә сикләнеү ярамай. Башҡа төбәктәргә күҙ һалайыҡ әле. Улар күберәк үҙ төбәгендә етештерелгән тауарҙарҙы ҡуя тамаша ҡылырға һәм шунда уҡ улар менән һатыу итә. Ғөмүмән, башҡалар үҙҙәренең заман менән бергә атлауын күрһәтә белә, ә беҙ һаман шул тирмәбеҙҙән ары китә алмайбыҙ. Шуға күрә ҡайһы берәүҙәрҙең башҡорттарҙы һаман да тирмәлә йәшәй, тип күҙ алдына килтереүенә аптырайһы түгел.

**▸ Бөгөн белемгә иғтибар арта, әлбиттә. Уҡыу йорттары йыл да меңәрләгән белгес сығара, ләкин уларҙың күбеһе эш баҙарында үҙ урынын тапмай. Был, үҙ сиратында, Башҡортостанда, ғөмүмән, тотош Рәсәйҙә эшһеҙҙәр һанының артыуына килтерә. Проблеманың сәбәбен нимәлә күрәһегеҙ?**

**Илгиз:** Беҙҙә уҡыу йорттары менән сәнәғәт предприятиелары, башҡа дәүләт һәм шәхси ойошмалар араһында бәйләнеш яйланмаған. Был илебеҙ иҡтисадын да, халыҡтың артабанғы йәшәйешен дә ауыр эҙемтәләргә килтерә. Мәҫәлән, бөгөнгө көндә төрлө предприятеларҙа эш хаҡы күп булһа ла, эшсе ҡулдар етешмәй, ә шул уҡ ваҡытта ҡулдарына юғары белем хаҡындағы диплом тотҡан бихисап юрист, иҡтисадсы, бухгалтер һәм уҡытыусы эш таба алмай, өйҙә ата-әсәһе елкәһендә ятыуын дауам итә. Дөрөҫөн әйткәндә, уҡып сыҡҡан йәш белгескә киләсәктә эш урыны булырмы-юҡмы икәнлеге дәүләтте лә, уҡыу йорттарын да, атай-әсәйҙәрҙе лә, шулай уҡ йәштәрҙең үҙҙәрен дә ҡыҙыҡһындырмай. Шуға күрә киләсәктә эшһеҙҙәр армияһын тулыландырмаҫ өсөн йәштәр үҙләштерергә теләгән һөнәрҙәренең киләсәктә талап ителәсәкме, юҡмы икәнен уйлап эш итергә тейеш. Шулай уҡ уҡыу йорттары теге йәки был ойошма һәм предприятиеларға маҡсатлы рәүештә белгестәр әҙерләһә, күпкә һөҙөмтәлерәк булыр ине.

Шул уҡ ваҡытта Рәсәйҙе яҡын сит илдән килеүселәр "баҫып" алды. Йыл һайын меңәрләгән үзбәк, тажик, ҡырғыҙ һәм башҡа милләт вәкилдәре беҙҙең илгә килеп төпләнә. Ни өсөн үҙебеҙҙең граждандарға эш юҡ, тибеҙ, ә ситтән килеүселәр эшен дә таба, аҡса ла эшләй. Был мәсьәләгә ике яҡлап ҡарау мөһим. Беҙҙең илдәге хеҙмәт баҙары бөгөн әҙ эшләп, күп аҡса алырға тырышҡан рәсәйлеләр менән тулы. Теге йәки был өлкәлә кәрәкле һөнәргә эйә булмаһалар ҙа, улар үҙҙәрен күп аҡса алырға хоҡуҡлы итеп күрә. Был бигерәк тә һуңғы утыҙ йыл эсендә тыуыусыларға ҡағыла. Шуға күрә улар эшһеҙ атай-әсәй елкәһендә ятырға әҙер, ләкин сит ил граждандары тир түккән төҙөлөш, коммуналь хеҙмәт өлкәһенә, баҡса үҫтереүгә, ғөмүмән, "ҡара эшкә" бармай. Ата-әсәләр ҙә әллә күпме аҡса түгеп, көс-хәлгә уҡытып алған юрист, иҡтисадсы, уҡытыусы балаларын бындай эшкә ебәрергә теләмәй. Шулай итеп, ике яҡ та һәйбәт заманалар килеүен көтөп ята бирә. Тора-бара атай-әсәй инде утыҙҙы, ҡырҡты уҙған балаһын ҡарауҙан ялҡа, ә "бала" өйрәнгән, барыһы ла әҙер булған көнитмешенән айырылырға теләмәй. Улар араһында низағтар башлана. Ошондай хәл килеп тыумаһын өсөн балаларҙы бәләкәйҙән эште ауырына, еңеленә, ағына, ҡараһына айырмаҫҡа өйрәтеү мөһим, минеңсә.



**▸ Һеҙ ҡытай, япон, корея телдәрен өйрәнәһегеҙ һәм был милләт вәкилдәренең көнитмеше, милли үҙенсәлеге, холоҡ-ғәҙәттәре тураһында ла хәбәрҙарһығыҙҙыр, моғайын?**

**Илһам:** Һәр халыҡтың үҙенә генә хас үҙенсәлеге, характеры бар. Мәҫәлән, кореялы, ҡытай һәм япондарҙың бер-береһенә оҡшашлығы бары тик тышҡы ҡиәфәткә генә ҡайтып ҡала. Япондар үҙҙәрен һауалыраҡ тота. Шулай уҡ уларҙа ниндәйҙер ҡылансыҡлыҡ та бар. Шул уҡ ваҡытта улар буш һүҙ һөйләргә яратмауы, ә аныҡ эштәр башҡарыуҙы хуп күреүе менән башҡаларҙан айырылып тора. Улар шулай уҡ йыйнаҡ һәм практик халыҡ.

Корея халҡын мин Көнсығыштың йәһүдтәре, тип әйтер инем. Башҡа илдәр менән сағыштырғанда улар биләгән территория бәләкәй генә утрауҙы тәшкил итә. Ләкин уларҙың тырыш булыуы, бар нәмәгә ентекле ҡарауы һәм һәр эште урын-еренә еткереп башҡарыуы юғары һөҙөмтәләргә килтерә. Йәшәү кимәле менән дә, иҡтисади йәһәттән дә улар тотороҡло йәшәй. Кореяны "икенсе Америка" тип йөрөтөүҙәре лә күпте һөйләй, минеңсә.

**Илгиз:** Ҡытайҙар - прагматик халыҡ. Сит илгә уҡырға килеүсе ҡытай студенттары күп осраҡта бай ғаиләләрҙән һәм улар бында ни өсөн килеүен, нимәгә өйрәнергә тейешлеген һәм киләсәктә алған белемдәре ниндәй тарафта ҡулланыласаҡ икәнен яҡшы аңлайҙар. Аталарының байлығы уларға ысынлап та ҡыҙыҡлы һәм файҙалы булған уҡыу йортонда уҡырға мөмкинлек бирә. Беҙҙә, мәҫәлән, йәштәр уҡырға инеүе еңел булған йәки түләргә кәрәкмәгән юғары уҡыу йортон һайлай, ә ҡытайҙар иһә нәҡ ил-йортҡа, халыҡҡа кәрәк булған уҡыу йортон һәм һөнәрҙе һайлай.

Ҡытай йәштәре, беҙҙән айырмалы рәүештә, киләсәкте бер-ике йыл менән генә түгел, ә унар йыллап алға күҙаллай. Беҙҙекеләр диплом алыу хаҡында ғына уйлаһа, улар үҙҙәренең алдағы ун йыллыҡ тормошон теүәлләп ҡуя. Тағы ла бер айырма хаҡында әйтеп үтеү мөһимдер, тип уйлайым. Беҙҙең егеттәр киләсәген ҡатыны, балалары һәм уларҙың йәшәйеше менән генә бәйләһә, ҡытай егеттәре өсөн ғаилә - ул, ҡатыны һәм балаларынан тыш, атай-әсәһе, олатай һәм өләсәһе, шулай уҡ ҡатынының да туғандары. Тимәк, улар баштан уҡ үҙ елкәләренә ошондай оло яуаплылыҡ ала, ә беҙҙә ҡайһы бер егеттәр хатта үҙ яҙмышы өсөн дә яуаплылыҡ ала алмай.

***Башҡорт егеттәре һәм ҡыҙҙарының Азия телдәрен өйрәнеүенә тағы ла бер сәбәп бар. Ҡытай һәм Японияның дәүләт архивтарында башҡорт халҡы тураһында мәғлүмәт күп. Әлегә тиклем улар үҙҙәренең өйрәнеүсеһен көтә. Бөгөнгө көндә был юҫыҡта бары тик татар ғалимдары ғына эш алып бара. Беҙгә лә үҙ тарихыбыҙға битараф булмаҫҡа һәм архивтарҙағы мәғлүмәттәрҙе өйрәнә башларға ваҡыт. Шуға күрә әлеге ваҡытта телдәрҙе үҙләштереүебеҙ шәхсән үҙебеҙгә генә түгел, ә халҡыбыҙҙың әлегәсә яҡтыртылмаған тарихын өйрәнеүҙә лә кәрәк булыр, тип ышанабыҙ. Был өлкәлә эш алып барған, эш алып барырға теләгән ғалимдарыбыҙға ла эскерһеҙ ярҙамыбыҙҙан баш тартмайбыҙ.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һәр быуын йәштәре үҙе йәшәгән осорға хас фекер ебе төйнәй. Йәштәр һәр саҡ бөгөнгөгә ҡарата ҡәтғиерәк, ә киләсәккә талапсаныраҡ була. Йәмғиәтте борсоған мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн дә йәшлеккә генә хас булған амбициоз фекерҙәр тәҡдим итә. Улар быуаттар дауамында йәшәп килгән традицияларға ла икенсе күҙлектән сығып ҡарай һәм замана талаптарына яраҡлаштырырға тырыша, ләкин уларҙы бөтөнләй инҡар итмәүҙәре менән дөрөҫ эшләй. Үҙҙәре "яңылыш" тип һанаған уй-фекерҙе кире ҡағырға, ҡалыплашҡан ҡараштарға ҡаршы сығырға ҡурҡмай һәм күп осраҡта хаҡ булыуҙарын иҫбат итә. Нәҡ ошондай йәштәр йәмғиәт үҫешенә көслө импульс бирә лә инде.**

**Гөлназ САФУАНОВА әңгәмәләште.**

*✓ Ирек биреү бит баҡса кәртәһен емереп ырғытып, унда теләгән кеше тапап йөрөргә юл ҡуйыу түгел. Журналистика ул - теманы таба белеү, күрһәтә һәм күтәрә белеү, йәмғиәттең иғтибарын ана шул темаға йүнәлтә белеү.*



*ПРЕМИЯҒА ДӘҒҮӘ ИТЕҮСЕЛӘР*

**2012 йылда БР Хөкүмәте ҡарамағындағы Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияға тәҡдим ителеүселәр араһында "Ағиҙел" журналының бүлек мөхәррире, билдәле журналист Мәхмүт Хужин, "Аманат" журналының яуаплы сәркәтибе, билдәле шағир Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ һәм Башҡортостан "Юлдаш" телерадиокомпанияһы журналисы Зөһрә АРСАЕВА бар. Беҙ уларға "Һеҙҙе үҙ ризалығығыҙҙан тыш был премияға тәҡдим итмәгәндәрҙер, тип уйлайбыҙ. Ә бына ни өсөн һеҙ үҙегеҙҙе ошо премияға лайыҡлы тип иҫәпләйһегеҙ?" һәм "Бөгөнгө журналист ни өсөн ысынбарлыҡ хаҡында яҙа, һөйләй һәм күрһәтә алмай? Ғөмүмән, ни өсөн беҙ ике төрлө йәки яртылаш хәҡиҡәт менән йәшәргә мәжбүрбеҙ?" тигән ике һорау бирҙек, түбәндә уларҙың яуаптарын урынлаштырабыҙ.**

# ТЫШТА ЯМҒЫР ЯУҺА...

## күктәргә һуҡранырға түгел



**Мәхмүт ХУЖИН:** 1. Комиссия ҡарамағына ебәрелгән редакция хеҙмәткәрҙәре йыйылышы протоколында филология фәндәре докторы Фәнил Күзбәковтың шундай фекере бар: "Ҡәләмдәшебеҙ һәр ваҡыт иң актуаль темаларға мөрәжәғәт итә, уның мәҡәләләре фекерҙәренең конструктивлығы, компетентлығы менән айырылып тора. Телгә алынған факттар һәр ваҡыт нигеҙле, иҫбатланған. Дәғүәсе Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге дәүләт премияһына күптән лайыҡ, тип иҫәпләйем". Ысынлап та, дәүләт премияһы - ул теге йәки был кешенең ижадына үҙенсәлекле йәмғиәт баһаһы. Ә инде ошо баһаны ишетеү, ҡолаҡҡа элеү, йәғни минең премияға лайыҡмы, түгелме икәнде билдәләү хоҡуғы комиссия ағзаларына ғына бирелгән.

2. Һорауҙың икенсеһенә тулыраҡ яуап ҡайтарыу өсөн уға үҙемдең дә һорауҙарым бар. Мәҫәлән, бөгөнгө ысынбарлыҡты яҡшы белгән, теге йәки был проблеманы төбөнә төшөп өйрәнгән журналистар ҡалдымы? Улар үҙ фекерен ҡайһы тема (тармаҡ, өлкә) буйынса "яҙа, һөйләй һәм күрһәтә алмай"? Уға ручкаға тотонорҙан элек үк кемдәрҙер янаймы?

Был риторик һорауҙарҙы мин тиктәҫкә бирмәнем, сөнки Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының 29-сы статьяһына ярашлы, "Рәсәйҙә фекер һәм һүҙ азатлығы гарантиялана". Минеңсә, бында һүҙ тәнҡит ирке тураһында бара. Ә тәнҡитләү өсөн етешһеҙлекте күреү генә аҙ, тәнҡиттең Конституцияла нығытылған ҡайһы положениеның, ниндәй закондың боҙолоуын иҫбатлап, нигеҙле, кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр менән ышандырырлыҡ итеп яҙылыуы мотлаҡ. Ғәҙәттә, ундай тәнҡиткә ҡарата асыу белдереүсе, авторҙы эҙәрлекләргә маташыусы булмай. Минең үҙемә, шундай йөкмәткеле мәҡәләләр яҙырға ҡурҡмайһығыҙмы ни, тигән һорауҙар ҙа ишетергә тура килгеләне. Бындай осраҡта мин Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының тейешле статьяһына таянып яуап бирәм. Ҡыҙғаныска ҡаршы, күптәр "Рәсәй Федерацияһында суверенитеттың һәм властың берҙән-бер сығанағы уның күп милләтле халҡы" (1-се пункт 3-сө статья) икәнлеген башына ла килтермәй. Ә бит тәнҡиткә дусар ителгән вазифалар шул уҡ конституцион положениелар буйынса халыҡҡа ялланып хеҙмәт итеүсе генә. Беҙҙә һүҙ азатлығы юҡ, тигән ҡәләмдәштәребеҙ, минеңсә, үҙенең шәхси ҡарашын ғына белдерә, ә дөйөм күренеште түгел. Был - бер, икенсенән, конституцион положение нығыһын өсөн, ысынлап та, көрәшеү кәрәк.

Һорауҙың икенсе өлөшөнә яуап биреү өсөн, минеңсә, Рәсәй дәүләтенең йөкмәткеһенә, тәбиғәтенә мөрәжәғәт итеү зарур. Ғәҙәттә, мин ундай саҡта, империяларҙа подданныйҙар ғына йәшәй, ә граждандар түгел, тип яуаплайым. Әммә был яуаптың бер өлөшө генә, сөнки тарихтан мәғлүм булыуынса, урыҫ дәүләтенә ғүмер баҡый яттар идара итеп, халыҡ үҙ башлыҡтарын ғәҙәттә ек күргән, һәм был ғәҙәт бөгөн дә күҙәтелә. Урыҫ йәмғиәтенә европаса ғөрөф-ғәҙәттәр индерергә маташыу (был айырыуса Петр I дәүерендә көсәйә) был тойғоно кире сыҡмаҫлыҡ итеп нығыҡҡан. Һөҙөмтәлә социаль ҡоролоштар үҙгәреп торған һәм ҡайһы ғына ҡоролош урынлашмаһын, халыҡтың төп өлөшө унан отолған. Ә тоторокһоҙлоҡ шарттарында ыңғай сифаттар ерегә алмай, киреләре, киреһенсә, нығый. АҠШ-тың өсөнсө президенты Томас Джефферсон шундайыраҡ фекер әйтеп ҡалдырған: тоталитар режимдарҙа халыҡтың бер өлөшө миңрәүләнә, икенсеһе йәшәү рәүеше итеп ялағайлыҡты һайлай.

**Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ:** 1. Минең



тиҫтер коллегаларым барыһы ла тиерлек был премияны алып бөттө инде. Шуға былтыр, әллә нисәмә йыл йыйған публицистик материалдарымдан тупланған "Йәшел байлыҡ" тигән китабым килеп сыҡҡас, шуны премияға тәҡдим итеү уйы башҡа килеп-килеп киткәйне былай. Тик ул ниәт килде лә китте. Быйыл иһә, ысынлап та, тәҡдим иттеләр, ризалығымды һоранылар һәм мин баш тартманым. Лайыҡлы түгелмен, тигән уй хатта башҡа ла килмәне.

Матбуғат - бик мобиль тармаҡ бит, унда әйткән һүҙең ваҡытлы һәм тос булырға тейеш, ә бының өсөн тормоштоң ағымында барырға, саҡ ҡына алдараҡ та булырға кәрәк әле. Хатта тарихи темаларҙы ла бөгөнгө көн күҙлегенән, хәҙерге тормошҡа бәйләп күрһәтмәһәң, уларҙы береһе лә уҡымаясаҡ. Ә заказ бирәләр икән, тимәк, әлеге баҫмаларға тап шул тема кәрәк һәм тап һинең яҙыуың кәрәк, тип һанарға тейешһең инде. Үҙен журналисмын тип йөрөгән кеше "был минең темам түгел" тип әйтә алмай. Миңә, киреһенсә, беҙ "Йәшлек"тә эшләгән осорҙағы "журналист кешенең яҙа алмаған темаһы булырға тейеш түгел" тигән девиз нығырыраҡ оҡшай. Беҙ унда шулай "күп яҡлы" инек. Хәҙерге журналистар әүҙем түгел, тип әйтер инем, улар үҙ баҫмаһы буҫағаһынан да сыға алмайҙар. Ә мин үҙемде шул 90-сы йылдар журналистикаһы осҡонон йөрөтөүсе тип һанайым.

2. Был һорауға яуап бирер өсөн беҙҙең йәмғиәтебеҙҙең бөгөнгө торошо, ни хәлгә килеп төшөүөбөҙ тураһында һүҙ алып барырға кәрәк. Беҙҙең илебеҙҙә барыһы ла хәҙер ике төрлө тормош менән йәшәй, ә журналистар тап шул тормошто сағылдыра. Шуға ла бында, журналистар ысынбарлыҡты күрһәтә, ә ысынбарлыҡ үҙе шулай ул, тиеү дөрөҫөрәк булыр. Ә мин мәсьәләне былайыраҡ ҡуйыр инем: ҡайҙа беҙҙә бөгөн яҙа, һөйләй һәм күрһәтә алырлыҡ журналистар? Уларҙы цензура баҫа, тиер инең, берәй нәмә яҙып, сығара алмай йөрөгән кешене лә күргәнем юҡ... Йәгеҙ әле, барлап ҡарайыҡ: нимәне бөгөн журналистар яҙа, һөйләй йә күрһәтә алмай? Тотош эфир, гәзит-журналдар, интернет беҙҙең тормошобоҙ ниндәй насар икәнлеге тураһындағы мәғлүмәт менән тулған даһа! Әллә һеҙҙең редакцияғыҙҙа бик шәп темаға яҙылған һәм донъя күрә алмай ыҙалаған мәҡәләләр ятамы ла, уларҙың авторҙары ишегегеҙ төбөндә сығарыуығыҙҙы талап итеп сират торамы? Ана шул-шул - юҡ мәҡәләләр, сөнки уларҙы яҙыусы юҡ. Кем әйтмешләй, мыжыусы күп, эшләүсе юҡ.

Ә яртылаш хәҡиҡәт, ике төрлө тормош, ысынлап та, бар. Ул беҙҙә һәр ваҡыт булды һәм әле лә бар донъябыҙҙы тултырған. Беҙҙең тормошобоҙҙоң насарлығына зарланған, өҙлөкһөҙ ил етәкселеген һүккән кеше лә хатта "текә" иномаркала йөрөй, сит илдәргә барып ял итеп ҡайта ла, тағы ла эш хаҡының әҙлегенә һуҡрана, үҙе йөрөп ҡайтҡан илдәрҙә тормоштоң ниндәй шәплеге тураһында һөйләй... Ә был ваҡытта ил етәкселеге беҙҙең илде лә шулар кимәленә күтәрергә тырышып, инновациялар, креатив, яңы идеялар, граждандыҡ әүҙемлеге кәрәклеге хаҡында һөрән һала, халыҡтың пассивлығына, хатта үҙ хоҡуҡтарын да яҡлай белмәүенә зарлана. Шул уҡ фонда беҙ күп шәп башланғыстарҙың йөҙәрләгән закондар, инструкциялар, административ кәртәләр аша сыға алмай һүнеп ҡалыуын да беләбеҙ. Ошолар иң ҡоласлы даирәлә ике йөҙлөлөк түгелме?

Хәҡиҡәт шундай: тышта ямғыр яуа, ти. Был ваҡытта тышҡа сыҡҡанда күктәргә һуҡранырға түгел, ә ҡулсатырҙың ҡайҙа ятҡанлығын иҫкә төшөрөргә кәрәк. Уныһы юҡ икән, рәхим ит - тоҙ түгелһеңдер. Ә беҙҙә нисек? Совет осоронда "быш-быш" ҡына әңгәмәләрҙә "цензура" тип аталған ҡаты сикләүҙәр бөгөнгө тормошобоҙҙа, беҙҙең әлеге йәмғиәтебеҙҙә, түбәнерәккә төшөп, хәҙер һәр кемдең күңеленә тәрән кереп ояланы шикелле. Мәҫәлән, бер ниндәй сикләү ҙә булмаған интернетта ла башҡорт журналистикаһы әле гөрләп сәскә атмай - уның өсөн башта түтәл ҡаҙырға, орлоҡ сәсергә һәм һыу һибергә кәрәк ине. Ирек биреү бит баҡса кәртәһен емереп ырғытып, унда теләгән кеше тапап йөрөргә юл ҡуйыу түгел. Журналистика ул - теманы таба белеү, күрһәтә һәм күтәрә белеү, йәмғиәттең иғтибарын ана шул темаға йүнәлтә белеү, йәғни, кәртәһеҙ генә баҡсаларҙа ла "тапарға ярамай", "өҙөргә ярамай", "ултырыу урыны", "ишек был яҡта" тигән билдәләрҙе дөрөҫ аңлап, унда үҙ түтәлеңде үҫтерә белеү. Беҙҙең йәмғиәтебеҙҙә бөгөн тыйыуҙар юҡ, әлбиттә, уның ҡарауы, баҡсаны тотошлай бейек ҡойма менән уратып ҡуйыу ғәҙәткә инеп китте. Насар ҙа түгелдер ул, ләкин беҙ ҡойма артында йәшәп ҡараныҡ түгелме һуң?

Минеңсә, журналистар үҙҙәре бөгөн үҙ статустарына тап килмәй. Бер Мәскәү мөхәрриренең әйткәне хәтерҙә:" Һин миңә башта материал яҙып килтер, ә мин сығараммы, юҡмы - унда эшең булмаһын! Һинең эшең - яҙыу, ә минең эшем - сығарыу. Яҙыу булмаған, сығарыу тураһында нисек һөйләйһең?" Ошоноң менән, минеңсә, һәр баҫманың мөхәррире лә килешә алыр ине. Сөнки хәҙер инициатива өҫтән килә, мөхәррирҙәр үҙҙәре "шуны яҙ", "шундайыраҡ мәҡәлә кәрәк", "бына шуны эшләргә ине" тип ҡушып ултырырға мәжбүр. Хәбәрселәр иһә ҡушҡанды теүәл генә башҡарып сыға ала, әммә үҙе яр һалып "шунда барам, шуны яҙам" тип эҙләнеп һәм сабып йөрөмәй. Аңлайһығыҙмы, уның әле мәҡәләһе юҡ, ә үҙе: " Ә-әй, барыбер сығармаясаҡтар..." - тигән ышаныста нығынған. Был ялҡаулыҡмы, битарафлыҡмы, ғәмһеҙлекме, донъяға ҡул һелтәүме - икенсе мәсьәлә. Беренсе мәсьәлә - шундай кеше журналист булып эшләргә тейешме?

**Зөһрә АРСАЕВА:** 1.Шәһит Хоҙайбирҙин



исемендәге премияға мине районданштарым тәҡдим итте. Быға тиклем дә республика кимәлендә үткәрелгән ижади бәйгеләрҙә ҡатнашҡаным булды, призлы урындар ҙа яуланым. Ә бына Хөкүмәт премияһына дәғүә итеү хаҡында һис кенә лә фекер йөрөтмәнем. Яҡташтарым шундай башланғыс менән сыҡҡас, әлбиттә, риза булдым. Башҡортостан "Юлдаш" телерадиокомпанияһында 14 йыл эшләйем. Студент саҡта уҡ килдем. "Саҡматаш" йәштәр программаһы, "Сәләмәтлек" радиожурналы - тәүге проекттар. "Юлдаш" мәғлүмәт һәм йыр-моң каналы асылғандан башлап тура эфирҙа тапшырыуҙар алып барам. Премияға тәҡдим ителгән тапшырыуҙарым һуңғы аралағы ижад емеше.

Мин дәүләт бүләгенә лайыҡмы? "Эйе, һис шикһеҙ" тип әйтһәм, тәкәбберлек булыр. Беҙҙең эш халыҡ менән бәйле, хеҙмәтебеҙ кешеләргә асыҡтан-асыҡ күренеп тора. Шуға ла был һорауҙы радио тыңлаусыларға биреү урынлы тип һанайым. Улар үҙҙәре һығымта яһар, лайыҡлы баһа ишеттерер...

2. Хәҡиҡәт бөйөк көскә эйә. Рәсәйҙә һүҙ элек тә төп ҡорал булған, хәҙер ҙә шулай. Журналистар ысынбарлыҡты сағылдыра алмай, тиһәк, ни өсөн йыл һайын тиҫтәләрсә һөнәрҙәшебеҙ үлтерелә. Был һан йылдан-йыл арта, журналист хеҙмәте хәүефлегә әүерелә бара. Төрмәлә ултырған журналистар ҙа юҡ түгел. Яңыраҡ ҡына бер мәҡәлә уҡығайным. Журналистарҙы яҡлау буйынса халыҡ-ара комитет мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Рәсәй үлтерелгән хәбәрселәрҙең һаны буйынса донъяла 4-се, ә асыҡланмаған үлем осраҡтары буйынса 9-сы урында тора. Боронғо замандарҙа насар хәбәр килтергән сапҡынсыларҙың башын киҫкәндәр, тимәк, хәҙер хәҡиҡәт өсөн журналистар зыян күрә булып сыға...

Замана журналисы ысынбарлыҡты яҙа, һөйләй һәм күрһәтә алмай, тип әйтә алмайым. Тик бөгөнгө йәмғиәт хәҡиҡәтте ишетергә, күрергә әҙерме һуң? Минеңсә, юҡ.

Журналист кешеләргә ярҙам итергә тейеш. Пугачеваның сираттағы туйы, Киркоровтың гардеробы, Галкиндың ҡәлғә-һарайҙары тураһында һөйләргә түгел, ә ябай граждандарҙың проблемаларын күрһәтергә бурыслы мәғлүмәт саралары. Мәҫәлән, бер начальниктың етем балаларға фатир бирмәүен, ошоға сарыф ителергә тейешле аҡсаларҙы үҙ кеҫәһенә һалыуын ни өсөн йәшерергә тейешбеҙ?

Һүҙ ҡөҙрәте бөйөк. Шуға ла һүҙ менән эш иткәндә үтә лә һаҡ булыу зарур. Әйткән, яҙған һүҙҙе ете ҡат үлсәп эш итеүҙе төп бурыс тип иҫәпләйем. Халҡыбыҙҙа "кеше һүҙе кеше үлтерә" тигән әйтем дә бар. Мәсьәләнең асылын аңлап, һалҡын ҡанлылыҡты һаҡлап, ситтән килгән йоғонтонан һаҡланып ижад итергә кәрәк, тип уйлайым. Журналист ысынбарлыҡты еткерер алдынан, әлбиттә, был мәғлүмәттең ниндәй эҙемтәһе булыуы ихтимал, тигән һорауға яуап эҙләргә тейеш. Йәмғиәттә ниндәй фекер уятасаҡ ул?

Хәйер, бөтәбеҙ өсөн дә бер Хәҡиҡәт-Дөрөҫлөк бармы был тормошта? Беҙ уны күрергә, ишетергә әҙерме? Әллә йәшерергә, ете йоҙаҡҡа бикләргә тырышабыҙмы? Тормошта яртылаш хәҡиҡәт булмаһын өсөн журналист ҡына түгел, тотош йәмғиәт, унда йәшәүселәр яуаплы. Бергә булғанда, берҙәм хәрәкәт иткәндә генә хәҡиҡәт тантана итер.

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

*✓ Әлбиттә, трагедияны элеккесә, тапалған юлдан китеп тә ҡуйырға булыр ине, әммә бөгөнгө көн үҙе режиссерҙан икенсе ҡараш, икенсе жанрҙы талап итә. Режиссер был юлды дөрөҫ тойоп эш иткән.*



АФАРИН!

# "ТУҒАНЛЫҠ"ТЫҢ ТӨП БҮЛӘГЕН...

## Стәрлетамаҡ театры алды

**Баш ҡалала "Туғанлыҡ" V Халыҡ-ара төрки телле театрҙар фестивале тамамланды. 1991 йылдан башлап үткәрелгән был сара үҙенең егерме йыллыҡ тарихы эсендә сәхнә оҫталары һәм театр һөйөүселәр байрамы кимәленән юғары күтәрелеп, төрки телле илдәрҙең мәҙәниәтен байытыу һәм үҙ-ара мәҙәни бәйләнештәрҙе нығытыу йәһәтенән мөһим аҙымдар яһаны. Быйылғы "Туғанлыҡ" та үҙенә генә хас үҙенсәлектәре, асыштары, осрашыуҙары менән тамашасыларҙың да, туғандаш халыҡтарҙың да хәтерендә оҙаҡ һаҡланасаҡ әле.**

### Ут күршеләр

"Башҡорт халҡында "ут күрше" тигән изге төшөнсә бар. Бик борон заманда башҡорттоң усағында ут һүнгән. Быны ишетеп ҡалған күршеләре үҙҙәре менән берәр бөртөк ҡуҙлы күмер алып килгән. Ошо күмерҙәрҙән йәшәү сығанағы булған усаҡ кире тоҡанған һәм уның тирәләй һәр саҡ дуҫтар - ут буйынса күршеләр йыйылған. Һеҙ ҙә беҙҙең өсөн уртаҡ тамырлы ут күршеләрһегеҙ һәм беҙ бөгөн Башҡортостан ерендә бишенсе тапҡыр туғанлыҡ усағы тоҡандырҙыҡ", - тигәйне фестивалде асыу тантанаһындағы сығышында Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Тәлғәт улы Сәғитов. Ысынлап та, йышыраҡ осраҡта географик яҡтан күрше булмаһаҡ та, уртаҡ тамырлы, атай-олатайҙарҙың уртаҡ теле менән бәйле булған, Арктиканың иксеҙ-сикһеҙ офоҡтарынан Ҡара диңгеҙ ярҙарына, Кавказдың ғорур бейеклектәренән Сал Урал тауҙары итәгенә, Азияның ҡырыҫ далаларынан Волга буйы киңлектәренә тиклем арауыҡта йәшәгән төрки телле ҡәрҙәштәребеҙҙе бер урынға, бер аҙнаға ғына булһа ла төрки мәҙәниәте үҙәгенә әүерелгән баш ҡалабыҙға - бер усаҡ янына йыйҙы "Туғанлыҡ". Унда республика театрҙарынан тыш, Алтай, Хакас, Яҡутстан, Балҡар, Сыуашстан, Татарстан, Дағстан, Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстан, Әзербайжан, Төркиә, Ҡырым автономиялы республикаһы (Украина) һәм Ғағауз Ере (Молдова) театрҙары коллективтары ҡатнашты.

- Икенсе тапҡыр был фестивалгә килеү бәхетен кисерәбеҙ. Тарих елдәре төрлө ерҙәргә ташлаһа ла, беҙҙе һаман да бәйләп тороусы уртаҡ яҡтарыбыҙ күп икәнен күрергә мөмкинлек бирә беҙгә был сара. Төрки телле халыҡтарҙың һәр береһендә һаҡланып ҡалған эпик байлыҡ та, уларҙың телдән-телгә күсеп һаҡланыу ысулы ла, сәсәнлек мәктәбе лә, милли кейемдәребеҙҙәге биҙәктәр ҙә беҙҙең уртаҡлыҡты дәлилләп тора. Театр -халыҡтың нисек йәшәгәнлеген күрһәтеүсе көҙгө, уның аша туғандаш халыҡтарҙың тормошо менән таныша алдыҡ, уртаҡ проблемаларҙы ла асыҡланыҡ, - Алтай Республикаһының Кучияк исемендәге Милли драма театры ғилми хеҙмәткәре Светлана Турбанакованың был һүҙҙәре һәр ҡунаҡтың фекере менән ауаздаш ине.

### Донъяға - туған тел аша





Бишенсе юбилей фестиваленең төп үҙенсәлектәренең береһе - уның ТӨРКСОЙ Халыҡ-ара ойошмаһы ағза-илдәре мәҙәниәт министрҙары Даими Советының XXX ултырышы сиктәрендә ойошторолоуы. Даими Советта башлыса ойошма эшмәкәрлегенең үткән осорона йомғаҡтар яһау, киләһе осорға программа ҡабул итеү кеүек мәсьәләләр ҡаралды. Дәүләт кимәлендәге был абруйлы сараның ябай халыҡ өсөн әһәмиәте ҙур булмаған кеүек тойолһа ла, ТӨРКСОЙ-ҙың ағза-илдәре Әзербайжан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Төркиәнән һәм күҙәтеүсе дәүләттәр - Рәсәй Федерацияһы субъекттарынан, шулай уҡ Рәсәй Мәҙәниәт министрлығынан килгән юғары ҡунаҡтар ҡатнашлығында үткән һәр бер сарала ойошманың генераль секретары Дюсен Касеинов менән Ҡаҙағстан Мәҙәниәт һәм мәғлүмәт министрлығының яуаплы сәркәтибе Жанна Ҡорманғәлиеваның туған телендә сығыш яһауы беҙгә оло һабаҡ һәм матур өлгө булды. Уҡыу йылы башланғандан алып республика мәктәптәрендә башҡорт теле дәресенең һәр бер сәғәте өсөн көрәш барғанлығын ишетеп тә, күреп тә белгәнлектән, ҡаҙаҡ халҡының сит ерҙә лә үҙенең телендә һөйләшеүе ихлас ихтирам тойғолары уятты һәм уларҙың былға нисек өлгәшеүе тураһында ҡыҙыҡһынмайынса ҡала алманыҡ. Жанна Дулат ҡыҙы Ҡаҙағстан Республикаһында ҡаҙаҡ теленең дәүләт теле иҫәпләнеүе, дәүләт органдарында рәсми рәүештә рус теленең дә ҡулланылыуы тураһында һөйләне. "Әммә Президентыбыҙҙың, дәүләтебеҙҙең сәйәсәте Ҡаҙағстан халҡын донъя, шул иҫәптән донъя телдәре киңлегенә интеграциялауға йүнәлтелгән. Шуға ла беҙ туған телебеҙҙе беләбеҙ, рус теленән дә баш тартмайбыҙ һәм уны ла үҫтерәбеҙ, инглиз телен дә өйрәнәбеҙ".

Фестивалдә Ҡаҙағстан Республикаһының Жамбыл исемендәге Көнсығыш Ҡаҙағстан өлкә драма театры ла бик уңышлы сығыш яһап, "Милли классиканы асыуҙа үҙенсәлекле художество алымы өсөн" номинацияһында еңеү яулаңы. Өфө тамашасыһына бөйөк Абай поэзияһына өр-яңы күҙлектән ҡарарға мөмкинлек биргән, кешенең Аллаға илтеүсе юлын һүрәтләгән "Әгәр кеше тип аталам икән" экспериментал спектакле тәҡдим ителде һәм ул "Туғанлыҡ"тың иң сағыу биттәренең береһе булды. Театр-ҡорам, театр-доға, рухи театр, рух башланғысын художестволы һүҙ менән тоташтырыусы театр тип атаны уны тәнҡитселәр.

### Заман яңы жанрҙар талап итә

Тәнҡитселәр тарафынан йылы һүҙгә лайыҡ булған тағы бер театр - М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры булды. Мостай Кәрим трагедияһы буйынса "Ай тотолған төндә" спектакле сәхнәгә сыҡҡан осоронда уҡ тәнҡитселәрҙә һәм тамашасыларҙа ҡапма-ҡаршы фекерҙәр тыуҙырғайны. Был фестивалдә иһә спектаклдең режиссер-ҡуйыусыһы Айрат Абушахмановтың бөтөн донъяға билдәле трагедияға яңыса, үҙенсәлекле ҡарашы хуплау тапты.

- Мостай Кәримдең был пьесаһы классик әҫәрҙәр исемлегендә, заманында уны Советтар Союзының һәр ҡалаһында тиерлек сәхнәләштерҙеләр. Ул саҡта төп геройҙы оло йәштәге, абруйлы актерҙар уйнай һәм шуға ла ниндәйҙер гонаһ тураһындағы тарих уларҙың абруйы аҫтында юғалып ҡала ла, шунда уҡ онотола ине. Әлбиттә, трагедияны элеккесә, тапалған юлдан китеп тә ҡуйырға булыр ине, әммә бөгөнгө көн үҙе режиссерҙан икенсе ҡараш, икенсе жанрҙы талап итә. Режиссер был юлды дөрөҫ тойоп эш иткән, - тине Рәсәйҙең атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Сергей Яшин.

"Театраль тормош" журналының баш мөхәррире, тәнҡитселәр коллегияһы рәйесе Олег Пивоваров был спектаклде төрки телле театрҙың донъя театр сәнғәте кимәленә күтәрелеүе, уға ҡушылыуы тип баһаланы. Айрат Абушахманов фестивалдең "Иң яҡшы режиссер эше" номинацияһына лайыҡ булды.

### Театр мәрхәмәтле булырға тейеш…

"Әгәр ҙә фестивалдә дөйөм һоҡланыу тойғоһо тыуҙырған бер генә спектакль булһа ла, сара үҙенең маҡсатына ирешһе, тигән һүҙ", ти, ғәҙәттә, тәнҡитселәр. Дөйөм алғанда, "Туғанлыҡ" V Халыҡ-ара төрки телле театрҙар фестиваленең картинаһы форма, жанр, стиль йәһәтенән ярайһы уҡ сағыу булды.

Тәбиғи, театр үҙенең тирәяғында барған ваҡиғаларҙы күрергә, уларҙы аңларға һәм художестволы һығымта яһай белергә тейеш. Әммә театр быны драматургһыҙ эшләй алмай. Рәсәй, шул иҫәптән төрки телле халыҡтар драматургияһы заманға яраҡлашырға тырышһа ла, театр сәнғәте матур сәхнә әҫәрҙәренә ҡытлыҡ кисерә. Фестиваль күрһәтеүенсә, бөгөн был бушлыҡты халыҡ ижадының гүзәл өлгөләрен сәхнәләштереү менән тултырырға тырышыу бар, әлбиттә. Үҙенә күрә, көтөп ултырғанға ҡарағанда был да яҡшы, тик шулай ҙа киләһе "Туғанлыҡ"та төрки халыҡтарының бөгөнгө йәшәйешен, уйҙарын, күңелен сағылдырған спектаклдәрҙең күберәк буласағына ышанайыҡ.

Шулай ҙа барыһында ла һоҡланыу тойғоһо уята алған спектакль булды был фестивалдә. Ҡунаҡ булып ҡына килгән Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт драма театрының Флорид Бүләковтың "Мәскәү-Васютки" драмаһы тәнҡитселәр коллегияһы тарафынан конкурс спектакле исемлегенә индерелеп, "Туғанлыҡ"тың Гран-приһын алып ҡайтты. Театр мөхәббәткә һәм мәрхәмәткә тулы булырға тейеш - ауыр тормош юлы үтеп, уның ахырына етеп килгәндә лә геройҙарҙың бер-береһенә булған мөхәббәте уларҙың көндәрен яҡтыраҡ итһә, драматургтың, режиссерҙың геройҙарын сикһеҙ яратып ижад итеүе спектаклде иң юғары дәрәжәгә күтәрҙе.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Туғанлыҡ" V халыҡ-ара төрки телле театрҙар фестиваленең I дәрәжә дипломына Ҡырғыҙстан Республикаһының Баткен өлкәһе музыкаль-драма театры, Сеспель исемендәге Сыуаш дәүләт йәш тамашасы театры, Ғағауз Милли драма театры, Ҡабарҙы-Балҡар Республикаһының Кулиев исемендәге Балҡар дәүләт драма театры, Әзербайжан Республикаһының Гянджин дәүләт драма театры лайыҡ булды.**

**"Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле" номинацияһында Дағстан Республикаһының А. Салауатов исемендәге Ҡумыҡ дәүләт музыкаль-драма театры артисткаһы Рабият Осаева, "Икенсе пландағы иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле" номинацияһында Яҡутстан Республикаһының Нюрбинск дәүләт күсмә драма театры артисткаһы Александра Кривогорницына, "Иң яҡшы ир-егет роле" номинацияһында Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт драма театры артисы Филарит Бакиров, "Икенсе пландағы иң яҡшы ир-егет роле" номинацияһында "Читиген" Хакас драма һәм этник музыка театры артисы, Хакас Республикаһының атҡаҙанған артисы Валерий Топоев еңеүсе булды. "Иң яҡшы музыкаль биҙәлеш" номинацияһы Төркиә Республикаһының Анкара дәүләт театрына, "Иң яҡшы пластика" - "Аслыхан" спектакле өсөн Ҡырым татарҙарының академик музыкаль-драма театрына (Украина) тапшырылды.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ШОКОЛАД...
## йөрәк сирҙәрен иҫкәртә

■ Сәләмәт йәшәү рәүеше алып бара башлауға бер ҡасан да һуң түгел. Швеция тикшеренеүселәре оло йәштәге кешеләргә лә насар ғәҙәттәренән баш тартырға тәҡдим итә. British Medical Journal яҙыуынса, 75 йәшкә тиклем быны эшләү кеше ғүмерен 5-6 йәшкә оҙайта. 18 йылға һуҙылған тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, оҙон ғүмер бер нисә фактор менән билдәләнә: ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәргә ҡарағанда оҙағыраҡ йәшәй, белем кимәле юғарыраҡ булғанда, әүҙем һәм сәләмәт тормош алып барғанда ла кешенең ғүмере оҙайлыраҡ була. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, хатта 75 йәштән һуң да сәләмәт йәшәү рәүешенә күсеүселәрҙең һәҙәмтәләре яҡшыра. Бигерәк тә тәмәке тартмаусыларҙың, шулай уҡ даими йәҙәү һәм гимнастика менән шөғөлләнеүселәр яҡшы күрһәткестәргә өлгәшә ала.

■ Лестер университеты белгестәре оҙаҡ итеп ҡолаҡсындар менән музыка тыңламаҫҡа кәңәш итә. Улар фекеренсә, юғары децибелдар мейенең нервы күҙәнәктәре тиресәһенә зыян итә. Был, үҙ сиратында, ишетеү менән бәйле проблемаларға килтерә. Ғалимдар әйтеүенсә, ҡайһы саҡта ҡолаҡсындарҙағы тауыштың көсө самолеттың реактив двигателе сығарған тауыш көсөнә - 110 децибелға тиң. Ҡолаҡтар бындай көслө тауыш һөжүменә дусар булғанда, мейе күҙәнәктәре тарҡала: аксондарҙың миелин тиресәһе зыян күрә. Был электр сигналдарын тапшырыуҙы ауырлаштыра һәм һаңғыраулыҡ барлыҡҡа килә.

■ Күптәр артыҡ ауырлыҡтан ҡотолоу маҡсатында иң тәүҙә рационынан икмәк ризыҡтарын алып ташлай. Ярамаған аҙыҡтар исемлегенә торт һәм пирожныйҙар ғына түгел, йышыраҡ икмәк тә эләгә. Шул уҡ ваҡытта, Британияның туҡланыу фондында белдереүҙәренсә, икмәктең һимереүгә бер ниндәй ҡатнашлығы ла юҡ. Киреһенсә, ул организм өсөн бик файҙалы. Икмәктә һөйәктәр өсөн кәрәкле кальций, стресҡа ҡаршы тороуҙы көсәйтеүсе В витамины, тире һәм сәстәр өсөн файҙалы протеиндар бар. Бынан тыш, диетологтар фекеренсә, икмәк аҡһым, тимер һәм фолий кислотаһын үҙләштерергә ярҙам итә.

■ Каролина институты (Швеция) ир-егеттәргә аҙнаһына бер тапҡыр ғына булһа ла шоколад ашарға тәҡдим итә. Ете көнгә бер тапҡыр бер шоколад батоны ашау киләһе ун йыл эсендә инсульт хәүефен 17 процентҡа түбәнәйтә. Был фекерҙе ғилми яҡтан дәлилләү өсөн ғалимдар 37 мең ир-егеттең рационын тикшергән. Һәҙәмтәләр күрһәтеүенсә, какао нигеҙендәге продукттарҙы күберәк ҡулланыусылар араһында инсульт аҙыраҡ теркәлгән. Әйткәндәй, күптәр әсе шоколадты ғына файҙалы тип иҫәпләй, әммә шведтар 90 процент осраҡта һөтлө шоколад ашай. Шоколадтың был төрө лә үҙен инсультҡа ҡаршы профилактикала яҡшы сара булараҡ раҫлаған. Ғалимдар быны шоколадтағы флавоноидтарҙың йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән яҡшы һаҡлауы менән аңлата. Флавоноидтар шулай уҡ ҡан баҫымын, "насар" холестерин кимәлен түбәнәйтә.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ДӘҒҮӘСЕЛӘРЕМ АЛДЫНА...
## батыр ҡыҙ булып барып баҫам



(Башы 1-се биттә).

### Шатраш уйнауым нисек башланды?

Ишембай ҡалаһында тыуғанмын, атайым - ябай хеҙмәткәр, әсәйем - башланғыс синыфтар уҡытыусыһы. Һеңлем һәм ҡустым бар. Ғаиләбеҙҙә төп иғтибар баланы бәләкәйҙән ниндәй ҙә булһа яҡшы һөнәргә ылыҡтырыуға йүнәлтелгән. Баланың йәне тартылған түңәрәктәргә өҫтөнлөк бирелә. Минең шашкаға ылығыуым балалар баҡсаһынан башланды, баҡсаға килеп, беҙҙе, ыбыр-сыбыр балаларҙы, Әлфиә Винер ҡыҙы Фәхретдинова исемле тренер шашка уйнатып ҡараны. Ул көндө әле лә бик яҡшы хәтерләйем. Олатайым менән быға тиклем дә уйнап ҡарағаным булғанғамы, шашкала бер аҙ ғына тәжрибәм бар ине. Әлфиә апай мине клубҡа саҡырҙы. Ҡайтып, шашка клубына яҙылырға теләгем барлығын әйткәс, атай-әсәйем риза булды. Ә.-З. Вәлиди исемендәге 2-се Республика башҡорт лицей-интернатына уҡырға барғас, Александр Павлович Мельниковтың шашка дәрестәренә йөрөнөм. Ул Өфөгә күсеп киткәс, Ирек Салауат улы Ғәтиәтуллинда, аҙаҡ Владимир Иванович Миньшинда һабаҡтар алдым. Владимир Иванович мине ололар менән дә уйнарға өйрәтте. 10-сы синыфҡа Өфөгә Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика лицей-интернатына күскәс тә хәҙер инде Өфөлә эшләгән Александр Павлович Мельниковтың лицейҙа уҙғарған түңәрәгенә йөрөй башланым. Шулай итеп, мин бер-нисә тренер ҡарамағында тәрбиәләндем.

### Үҙемдән сығып әйтәм...

Шашка уйыны ярайһы уҡ яҡшы үҫешкән ҡалала тыуыуым, ҡыҙыҡһыныуымды күтәреп алған атай-әсәйем, тренерҙарым һәм хәләмә инә белгән, мине аңлаған уҡытыусыларым менән уңдым, тип әйтә алам. Форсаттан файҙаланып, барыһына ла рәхмәт әйтке килә. Ишембай мәктәптәренең һәр класында шашка дәрестәре уҡытыла. Бының менән, минең уйлауымса, балаларҙың күп кенә һәләттәре асылыуға булышлыҡ ителә. Әйтәйек, мәктәпкәсә йәштәге шашка уйнаусының хәтере яҡшырыуын үҙемдән алып әйтә алам, тағы ла баланың логик фекерләүе үҫешә, киләсәккә аныҡ маҡсаттары барлыҡҡа килә һәм ниməһе бигерәк ҡыҙыҡ - бала өлкәндәрсә фекер йөрөтә башлай. Шашка уйнарға теләү һәм уйнау - йәшкә бәйле түгел, шулай уҡ шашканы яҡшы уйнарға өйрәнеү өсөн дә уйынсының йәше мөһим түгел. Теләк булһа, айыуҙы ла бейетәләр. Бөгөнгө көндә балалар уйнаған уйындар интеллект кимәлен үҫтереүгә ҡоролмаған. Әйтәйек, ата-әсә һәм бала араһында ҙур ҡапма-ҡаршылыҡ тыуҙырған компьютер уйындарын ғына алғанда ла, улар баланы билдәле бер сценарий буйлап алып бара, шуға күрә лә уның аңын йоҡлата, ти күп белгестәр. Ә бына шашка уйыны, киреһенсә, арауыҡ һәм ваҡыт төшөнсәләрен контролдә тоторға өйрәтә. Был ғәҙәт бигерәк тә ваҡытҡа уйнағанда нығына. Тәжрибәле шашкасы бер ҡарауҙан бихисап ҡатмарлы йөрөштәр комбинацияһын иҫәпләп сығара, шул уҡ ваҡытта минуттар, секундтар үтеүе тураһында ла онотмай, иғтибарын да кәрәк йүнәлешкә туплай. Бөгөнгө заманда, бер уйлаһаң, үрҙә һанап үтелгән һыҙаттар былай ҙа балаларҙа үҫешкән, сөнки тиҙ үҙгәреүсән һәм техник прогрестар заманында йәшәйбеҙ. Ә шулай ҙа күптәр ваҡыт юҡлыҡҡа зарлана барыбер.

Беренсе синыфҡа барыр алдынан шашка уйнарға өйрәтелгән балала ултыраҡлыҡ тәрбиәләнә. Тағы ла, был уйын сәмде ҡуҙғата, йәш кешенең тырышлығын, ҡуйған маҡсатына өлгәшеүсәнлеген арттыра. Балаларҙың тиҫтерҙәре менән ярышыу әүәслегенән сығып, унын уҡыуҙа, спортта еңергә ынтылыусан булыуын билдәләге килә.

### Шашка - шул уҡ тормош ул

Хәтер тураһында. Кемдеңдер хәтер үҫенсәлеге ишетеү менән бәйле. Русса "слуховая память" тиҙәр быны. Бындай хәтер, ғәҙәттә, музыканттарҙа нық үҫешә. Ә теүәл фәндәр менән ҡыҙыҡһынған, шашка, шахмат уйындары менән мауыҡҡан кешеләр өсөн күргәҙмә әйберҙәрҙе хәтерҙә ҡалдырыуы күпкә еңелерәк. Быныһын русса "зрительная память" тиҙәр. Бындай хәтер миндә шашка уйнаған саҡта нығынғанмы, әллә тәбиғәттән бирелгәнме, аныҡ ҡына әйтә алайым, әммә хәтерем уҡыуҙа ла, тормошта ла нык ярҙам итә. Мәҫәлән, бер тапҡыр уҡылған әҫәрҙе, формуланы йә ҡағыҙне таҡта алдында еңел генә һүҙмә-һүҙ һөйләй алам. Шиғыр ятлау ҙа минең өсөн еңел бирелә. Хәтерҙе яҡшы тотор өсөн кемдәрҙер китап уҡырға кәңәш итә. Мин улар менән килешәм, шулай уҡ шашка уйнау ҙа хәтерҙе яҡшыртыуға булышлыҡ итәләр, тип фараз итәм.

Махсус һанап ултырғаным юҡ, партия ваҡытында яҡынса 10 аҙымға тиклем йөрөштәрҙе иҫәпләп сығара алам. Уйын ваҡытында тиҙ-тиҙ генә алдағы хәл-ваҡиғалар ағышын әйләндерә башлайһың, ҡайһы саҡта дөп-дөрөҫ тап килеп ҡуя. Иң мөһиме, хискә бирелмәй, аңыңды ойотмай уйнарға. Шуныһы менән шашка уйыны һәр аҙымды тиҙ һәм дөрөҫ яһарға өйрәткәндер, тим.

Уйында - уйынса, тормошта - тормошса, тиһәк тә, уйын менән тормош араһында оҡшашлыҡ күҙгә күренеп тора. Тегендә лә, бында ла беҙҙең алда бихисап мөмкинлектәр, ымһындырғыс юлдар ята. Шулар араһынан иң дөрөҫ, кәрәкле юлды һайлай белеү - шашкасы булмышын билдәләй. Беҙҙең тренерыбыҙ: "Шашка ул - бәләкәй генә тормош моделе, шуға күрә һәр уйынды еренә еткереп уйнағыҙ", - тип әйтә торғайны.

### Мин нисек ҡурҡыуымды еңдем

Ә хәҙер тағы бер ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәрем тураһында. Дөрөҫөрәге, шашка уйнаған саҡта үҙемдең нисек үҙгәреүем тураһында һөйләп үтмәксемен. Ярыштар ваҡытында һәр партия һайын ҡаушата. Быға өҫтәп, оялсанмын. Ә бына тренерҙарым миндә булған оялсанлыкты йәйләп-йәйләп ҡыҫырыҡлып сығара алды. Уйындар ваҡытында ғына мин шундай батыр ҡыҙға әүереләм. Әлбиттә, был тылсымлы әүерелеү түгел, ә эске көсөргәнеш талап иткән, әллә күпме тырышлыҡ талап иткән үҙгәрешем. Әйткәндәй, шашкала кеше факторы, йәғни дәғүәсеңдән ҡурҡыу-ҡурҡмау ҙа ҙур ғына роль уйнай. Компьютер менән кешене сағыштырһаҡ, шуны билдәләргә булыр ине: кеше барыбер компьютерға ҡарағанда ҡыҙыҡлыраҡ дәғүәсе. Кешегә - хәйләкәрлек, ә машинаға - бер ҡатлылыҡ, тура барыусанлыҡ хас. Икенсе яҡтан, кешенең төрлө сағы була. Шашкасы үҙенә таныш булмаған комбинациянан юғалып ҡалып, яңылыш аҙым эшләүе лә мөмкин. Шуға күрә, уйын алдынан бер аҙ тулҡынланһам да, шашка өҫтәле артына ултырғас, барлыҡ хафаланыуҙарым ҡул менән һыпырып ташланғандай була.

Донъя чемпионатына килгәндә, бындағы бар дәғүәселәрем менән уйнау ҙа берҙәй ҡыйын булды, кемделер айырып ҡына әйтеүе ҡыйын. Әйҙәгеҙ, ярыш тураһында иң баштан - сәйәхәт башынан бәйән итәйем, булмаһа.

## Европаның арҡырыһын-буйын иңләнек

Быйылғы йәй айҙарында минә Европаның төрлө илдәрендә булырға тура килде. Мин был сәйәхәттәремде "шашка турнеһы", тип атар инем. Сәйәхәт-ярыштарым июлдең егермеләрендә Эстонияның баш ҡалаһы Таллинда үткән тиҙ шашкалар буйынса донъя кубогынан башланғайны, Финляндияла Алланд утрауҙарында Скандинавия кубогында дауам итте. Артабан тура Швецияға киттек, унда тиҙ йөрешле шашкалар буйынса Европа чемпионаты үтте. Һуңынан Латвияның баш ҡалаһы Ригала күнекмәләр үтте. Был йыйындарҙан һуң Францияға алып барҙылар. Минә был турне бик оҡшаны, сөнки беренсе тапҡыр төрлө илдәрҙе бер юлы күрҙем.

Эстония менән Латвия Балтик диңгеҙе буйында урынлашҡан, уларҙың архитектураһы бер-береһенә ныҡ оҡшаш. Ҡалалар техник һәм архитектура йәһәтенән бик үсешкән булһалар ҙа, урта өлөшөндәге боронғо йорттар һаман да шул килеш ултыра, урынындағы халыҡ үҙәкте "Иҫке ҡала" тип йөрөтә. Урамдарҙа юлдар бик боронғо - йәймә таштарҙан һалынған. Швецияның баш ҡалаһы Стокгольм - үҫешкән мегаполис булыуы менән хәтерҙә ҡалһа, Фин утрауҙарындағы диңгеҙҙең аҫыл ташлы ярҙары, урмандар ҡабатланмаҫ һәм ғүмерҙә лә онотолмаҫ тәьҫораттар ҡалдырҙы. Сәйәхәтебеҙ Францияла тамамланды. Лилль тип аталған бәләкәй генә ҡалала үтте донъя чемпионаты. Ярыш тураһында - артабанғы бүлек .

## Ярыш - ярыш ҡына түгел

Икенсе Донъя интеллектуаль уйындарында ҡатнашыуымды ҙур мәртәбәгә һанайым. Был уйындар 8 августан 23-нә тиклем биш спорт төрө - шашка, шахмат, ҡытай шашкаһы, шәреҡ илдәрендә киң таралған Го уйыны һәм бридж - кәрт буйынса уҙҙы.

Донъя кубогында йөҙ шаҡмаҡлы шашка уйынын швейцар системаһы буйынса классик шашка, тиҙ уйнала торған шашка һәм блиц, йәғни иң етеҙ уйнала торған шашка уйындары төрҙәре буйынса көс һынаштыҡ. Һәр ҡатнашыусы 9 тур уйнарға тейеш ине.

Ир-егеттәр араһындағы ярыштарҙа ҡатнашҡан яҡташым Айнур Шәйбәков уңышлы сығыш яһаны. Рәсәй йыйылма командаһы составында ике төрҙән - тиҙ уйнала торған программанан һәм блицтан - чемпион титулын, шәхси беренселек буйынса тиҙ уйнала торған программала 3-сө урын яуланы.

Ә беҙ, ҡатын-ҡыҙҙарҙың Рәсәй йыйылма командаһы, был ике төрҙә икенсе урынға лайыҡ булдыҡ. Донъя кубогы ярыштарында донъяның төрлө тарафтарынан ҡатнашыусылар йыйылғайны. Рәсәйҙән, Украинанан, Белоруссия, Голландия, Польша, Венгрия, Италия, Әзербайжан, Монголия, Ҡытай, Африканың Камерун Республикаһынан билдәле шашкасылар килде. Мин Украина, Рәсәй, Монголия, Голландия спортсылары менән көс һынаштым һәм 8-се турҙан уҡ беренсе урынға сығып, дағүәселәрем ҡыуып етә алмаҫлыҡ мәрәйҙәр йыя алдым. Йәғни, һуңғы турҙа еңелһәм дә беренсе урынға сығырлыҡ һәҙәмтәгә өлгәштем. Шулай итеп, мин шуны аңланым: был чемпионат минең өсөн ярыш ҡына булманы, ә барған юлымдың дөрөҫ, йүнәлешемдең аңғай булыуын дәлилләүсе сигнал да булды, тиергә була. Шулай ҙа әлегә шашканы хобби һымаҡ ҡына ҡабул итәм. Мәктәптән тыш ваҡытты файҙалы уҙғарыу сараһы ул минең өсөн. Артабан был уйын менән мауығыуымды ташламаҫмын, хатта күберәк тә ваҡытымды бүлә башлармын, тип ышанам. Яҡташым Тамара Танһыҡҡужина һымаҡ, донъя чемпионы титулын бер-нисә тапҡыр дәлилләү, шашка донъяһында лайыҡлы эҙ ҡалдырыу - әлегә маҡсаттарым шул...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Шашка тураһында Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайҙың фекере оҡшаны. Мәҡәләбеҙҙе ошо фекер менән тамамлағы килә: "Тамара Искәндәриәнең бер шиғырында "асыҡ торҡа менән яуға сығам" тигән тәрән мәғәнәгә эйә һүҙҙәр бар. Автор лирик геройҙың асыҡ торҡа, йәғни һаҡлағыс шлемдың битлеген асҡан килеш яуға сығыуы тураһында бәйән итә. Шашка уйынын да мин асыҡ торҡа менән яуға сығыуға сағыштырыр инем. Сөнки, шашка - ул асыҡ уйын, унда мәкер тиҙ асыла, тиҙ фашлана. Ни өсөн башҡорттар араһында шашкасылар күп? Сөнки был уйын беҙҙең милли характерыбыҙға - ихласлыҡҡа тап килә..." Айгөл Иҙрисованың үҙенә ҡарағыҙ: ниндәй ябай матурлыҡ, ихласлыҡ бөркөлә бит унан.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Инеш һүҙ

Был китапты яҙыу хаҡындағы уй миңә 2005 йылда килде. Ул ваҡытта мин үҙемдең 56 йәшемде билдәләгәйнем. Арыу ғына йәште булһам да, үҙемде ҡарт итеп түгел, ун алты йәшлек малай кеүек хис итә инем. Көн итергә урын тапмайынса, тәнемдәге барлыҡ ауырыуҙар ҡасып бөткән. Үлемдән ҡурҡыу хисе лә әллә ҡайҙа юғалған. Туғанлыҡ мөнәсәбәттәре лә мине элекке кеүек үк борсомай ине инде. Аҡса, хакимлыҡ, билдәлелек кеүек нимәләр менән дә башты ҡатырмай инем. Гәзит-журналдар уҡымай башлағас, уларға яҙылыуҙы туҡтаттым. Телевизорҙы айына ике ҡарайым. Нәфис әҙәбиәт тә уҡылмай башланы, ундағы геройҙар өсөн ҡайғырып ултырғансы, үҙ көнкүрешенде хәстәрләүең күпкә яҡшыраҡ булыр, тигән фекергә килгәйнем. Ҡатын-ҡыҙҙарға коллега, таныш йә замандаш итеп кенә ҡарайым. Был Ерҙә йәшәүемдең кисе етеп килгәненә ҡарамаҫтан, мин үҙемде йәшүҫмерҙәр кеүек түгел, ә ысынлап та малай ғына итеп хис итәм. Ваҡытымды тоғро юлдаштарым - тыныслыҡ һәм яңғыҙлыҡ менән уҙғарам, сөнки күмәк кешеләрҙең шауы, күнел сатыу тауыштарын ишетмәү яҡшыраҡ икәнен аңлағанмын. Тора-бара, ҡайҙа ғына булһам ла - баҙарҙамы, өҫтәл артындамы, фәнни-ғәмәли конференцияламы, бөтөн һөйләшеүҙәрҙең мәғәнәһеҙлеген, бушлығын тоя башланым. Шунан килде инде миңә был китапты яҙыу уйы. Шунда уҡ "Ун алты йәшлек ҡарт" тигән исем дә табылды китапҡа. Бына ул һеҙҙең алдығыҙҙа.

## Яңы тыуыу датаһы: 1990 йылдың 4 августы

Минең тыуыу хаҡындағы таныҡлыҡта ошолай тип яҙылған: "Самат Әбдрәхим улы Мөхәмәтйәнов, 1949 йылдың 20 июнендә Башҡорт АССР-ның Баймаҡ районы Муллаҡай ауылында тыуған". Был документта минең биологик тыуған көнөм теркәлгән. Ләкин 1990 йылдың 4 августында Силәбе өлкәһенең Златоуст ҡалаһында мин яңынан тыуҙым. Ул ерҙә атайым яғынан инәйем Йәмилә һәм уның хәләл ефете Насибулла бабай йәшәй ине. 1990 йылдың июлендә мин бөтә ғаиләм - ҡатыным Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы, ҡыҙым Әнисә, улым Ғайсар менән уларға ҡунаҡҡа килдек. 2 августың иртәһендә мәҙәниәт йортонда космос тәҙәләшө һәм НЛО темаһына лекция уҙғарылыуы тураһында ишеттем. Ул заман өсөн билет хаҡы ҡыйбат ҡына булһа ла - өс һум - беҙ Насибулла бабай менән барырбер унда барып әйләнергә булдыҡ.

Лектор М.В. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университеты студенты икән, үҙен Михайлов тип таныштырҙы. Ул беҙгә бик ҡыҙыҡлы итеп донъяның тәҙәләшө, Яҡтылыҡ менән Ҡараңғылыҡтың туҡтауһыҙ көрәше, фәрештәләр һәм шайтандар тураһында һөйләне. Люцифер исемле фәрештәнең күктән ергә төшөүе хаҡында аңлатҡан сағында ул һүҙ араһында ғына үҙенең өс йыл буйына ит ашамауы, ошондай аҙымы менән Яҡтылыҡ көстәренә ярҙам итеүе тураһында әйтеп ҡуйҙы.

Был һүҙ араһында ғына әйтелгән хәбәр минең артабанғы тормошомда хәл иткес роль уйнаны. Мәҙәниәт йортонан сыҡҡас, үҙ-үҙемә, бер ҡасан да ит һәм балыҡты ауыҙыма ла алмаясаҡмын, тип һүҙ бирҙем. Кис көнө был хаҡта ҡатыныма, балаларыма, туғандарыма хәбәр иттем. Вегетариан булырға тигән ниәтемде бер кем дә етди ҡабул итмәне, буғай. Башҡа туғандар, таныштар араһында был ябай булмаған йәшәү рәүешен һайлаусылар юҡ ине бит.

Икенсе көндә иртәнге аш мәлендә онотолоп китеп ҙур телем балыҡ бәлеше ашағанмын икән. Өҫтәл артындағылар күңелле генә көлә башлағас, уларҙың кисәге минең ҡарарымды шаяртыу итеп кенә ҡабул итеүен аңланым. Ләкин был бәлеш менән булған бәләкәй хатам мине һайланған юлдан тайпылдырманы. 1990 йылдың 4 августынан бөгөнгө көнгәсә ике принцип менән йәшәйем: 1. Һыра, спиртта тотолған дарыуҙар һәм башҡа спиртлы эсемлектәр эсмәскә. 2. Ит, йомортҡа, балыҡ ашамаҫҡа. Билдәләнгән дата рухи йән сифатында яңынан тыуыуым көнө булды.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Йоганың көҙрәтле көсө

Физик һәм аҡыл йәһәтенән үҙгәрештәр кисереүҙең иң ябай стратегияһы булып йога тора. Бик күп мең йылдар элек Боронғо Һиндостандың аҡыл эйәләре тарафынан һоҡланғыс аҡыл, тән һәм рух һәләтенә өлгәшеү өсөн уйлап сығарылған универсаль алым булараҡ, ул һеҙҙең өсөн дә могжизалар тыуҙырырға һәләтле. Йоганың асылы шунда: физик күнекмәләр (асан) ярҙамында, көсөргәнештән дөйөм арыныу, еңел диета ("саттвик"), тын алыуҙың дөрөҫ техникаһы һәм ыңғай фекерләү ярҙамында кеше үҙенең физик һәм рухи күрһәткестәрен ысын камиллыҡҡа тиклем күтәрә ала һәм тән менән йән бер бөтөнгә әүерелеп, оҙаҡ йылдарға ныҡлы сәләмәтлек тәьмин итә.

Йоганың идеялары һәм күнекмәләре иҫтә ҡалдырыу өсөн бик ябай. Әгәр һеҙ уны үҙегеҙҙә һынап ҡарамаған булһағыҙ, тимәк, йәшәреү сығанағы һәм эликсиры эргәһенән уны тәмләп ҡарамай үтеп китәһегеҙ.

Оҙаҡ йәшәүҙең 5-се сере: ыңғай фекерләү һәм хыялланыу тылсымы

"Хыялыңа табан ышанаслы барғанда һәм уйыңда тыуҙырған тормошоң менән йәшәргә тырышҡанда хатта үҙең дә хыялланмаған уңыш ҡаҙанырһың", тигән Торо. Һеҙҙең бөгөндән яңы ысынбарлыҡ төҙөү өсөн барлыҡ мөмкинлектәрегеҙ бар. Яңы ысынбарлыҡ ныҡлы сәләмәтлектә, уңышта, абсолют бәхеттә сағылыш табыуы ихтимал.

Һеҙ шулай уҡ хыялығыҙҙа ла булмаған уңышҡа өлгәшә алаһығыҙ. Бының өсөн уйҙарығыҙҙың тормошоғоҙҙо контролләүен онотмаҫҡа ғына кәрәк. Әгәр һеҙ аҡылығыҙҙың һағында иң яҡшы ҡапҡа һаҡсыһы кеүек тороп, унда бары тик айыҡ һәм матур фекерҙәр генә үтеп инеүенә юл ҡуйһағыҙ, бәхетле, сәләмәт һәм тыныс булырһығыҙ. Әгәр үткәндәрегеҙҙең кире фекерҙәре ҡоллоғонан ҡотола алмаһығыҙ икән, бер ваҡытта ла үҙегеҙҙе бәхетле һәм сәләмәт итеп тоймаясаҡһығыҙ.

Шуға күрә башығыҙҙа бары тик ыңғай, сифатлы фекерҙәрҙе генә тотоғоҙ. Ныҡлы һаулыҡ тураһында уйлағыҙ һәм ул мотлаҡ килер.

